ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 сентябрь (һарысай) 2024

№35 (1128)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 953 һум 58 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туғандарым баһаланы**




2

**Кемгә йәшәү еңелерәк?**



6,11

**Башҡортостан мәғарифы уңыштары**



8-9

**Фатихаларыбыҙ, доғаларыбыҙ...**

тормошобоҙға тыныслыҡ-именлек ҡайтарһын



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***"Башҡортостан, алға!" тигән саҡырыу һөҙөмтәләр килтерә, республикабыҙҙа һәр өлкәлә барлыкка килгән матур үҙгәрештәр, ҡаҙаныштар, яңылыҡтар ҡыуандыра. Улар хаҡында ни әйтерһегеҙ?***

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнография фәндәре кандидаты:*** Һөнәрем буйынса ла, ғүмер-ғүмергә халҡымдың уникаль тарихы, әсә телебеҙ өсөн янып-көйөүсе кеше булараҡ та милләтебеҙ рухиәте, унын үҫеше һәм яңырыу мәсьәләләре менең өсөн төп иғтибар үҙәгендә тора һәм республикабыҙҙа ошо йүнәлештәге һәр яңылыҡ, һәр сара күҙ алдымдан үтә. Әле яңыраҡ ҡына, ошо йәйҙең уртаһында, тыуған төйәгем - Баймаҡ районы Иҙелбайҙа (Кәкре ауыл) "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамын үткәреп, күптән сит илдәрҙә йәшәп ятҡан икенсе, өсөнсө быуын тамырҙаштарыбыҙҙы бергә туплап, ҡайтанан танышып-туғанлашып, милли хәтерҙе яңыртып, бәйләнештәрҙе нығытып алдыҡ. Милли хәтер ныҡлығы ситтә йәшәүселәрҙән алда, үҙ еребеҙҙә көн итеп, хәтер ептәре сыуалған урта һәм йәш быуындар өсөн дә бик кәрәк. Беҙгә был йәһәттән республикабыҙҙа ғәмәлдә булған, төҙөлә, тергеҙелә башлаған бик күп тарихи-этнографик һәйкәлдәр, комплекстар, мәҙәни-йәмғәтселек үҙәктәре рухиәтебеҙ мираҫын күҙ ҡараһылай һаҡларға, йәш быуынды ысын илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләргә ярҙам итә.

Мәҫәлән, һуңғы йылдар эсендә генә лә рухи хазинабыҙ ҡомартҡылары "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостары менән бәйле кешелек цивилизацияһы бишеге булған Шүлгәнташ мәмерйәһенең тарихи-мәҙәни музей комплексы төҙөлөп файҙаланыуға тапшырылғайны, бөгөн тағы бер тарихи объект - Евразия күсмә цивилизациялар музейы ҡалҡып сығыуға шаһит булдыҡ. Унан да алдараҡ милли батырыбыҙҙың тыуған көнөндә Салауат районы элекке Тәкәй ауылы урынында "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексын ҡабул итеп алғайныҡ. Ә бына асыҡ һауа аҫтындағы "Торатау" геопарк музейы күптән инде туристарҙың яратҡан урынына әйләнде. Дөрөҫ, был объекттар төҙөлөшөнә бөгөнгө заман күҙлегенән сығып, уларҙың ниндәйҙер кимәлдә килем сығанағы булараҡ ҡаралыуын күрмәү ҙә мөмкин түгелдер, ләкин был тарихи-мәҙәни комплекстарҙың иң беренсел әһәмиәтен - үҙенсәлекле, донъяла берҙән-бер булған, үҫемлектәре "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән, бай этнографияһы һәм археология табыштары менән хайран итеүсе боронғо тәбиғәт һәйкәлдәрен ҡурсылау, киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу, юғала барған өлөштәрен тәбиғи көйөнсә тергеҙеү бурысын һис тә кәметмәй, киреһенсә, уға иғтибарҙы икеләтә күберәк туплай. Рухиәтебеҙ һәйкәлдәре фән һәм алдынғы технологиялар ҡаҙаныштарын файҙаланыуҙан ота ғына, сөнки уларҙың әле асылып етмәгән серҙәре, төпкөлдә ятҡан ҡатламдары бар. Фән ҡаҙаныштары беҙгә шуларҙы төшөнөргә булышлыҡ итәсәк. Был объекттарға бөгөн айырыуса мәктәп уҡыусыларының күпләп походтарға, экскурсияларға килеүҙәрен күреп, күңел ҡыуана. Класс етәкселәре, тарих, туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары үҙ предметтарынан темаларҙы йәйге каникулдарҙа ошонда - Шүлгәнташ мәмерйәһенең музей комплексында йә булмаһа, Турахан кәшәнәһе янында асыҡ һауала ирекле дәрес итеп үткәрергә лә мөмкин бит! Был осраҡта тема балаларҙың хәтерендә мәңгелеккә ҡаласаҡ.

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК!




**Яҡшы йола был - оло байрамдар алдынан йәмәғәтселек мөхитен төҙөкләндереү, тирә-йүнде, юлдарҙы рәткә килтереү, яңы объекттар төҙөү. Ошо йолалар бик тә теүәл үтәлде Өфө ҡалғаһенең 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек сиктәрендә. Ә иң ҡыуандырған бүләк - ул уникаль Көрәш һарайы объекты булды. Уның әһәмиәте хатта донъя кимәленә күтәрелде. Был хаҡта Өфөгә эш сәфәре ваҡытында Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Хөснуллин шулай тигәйне: "Был донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә объектҡа һоҡланыуымды белдерәм. Ул беҙҙең илдә генә түгел, ә бөтөн донъяла үҙенең лайыҡлы урынын аласаҡ. Сөнки уға тиң башҡа көрәш һарайҙары донъяла булһа ла, бик аҙҙыр. Ул шул тиклем матур һәм лайыҡлы проект булған..."**

"Был Көрәш һарайы минең артымда торған бөйөк спортсыларға хөрмәт күрһәтеү, бөйөк илебеҙ байрағын яҡлағандары өсөн рәхмәт белдереүҙе аңлата. Улар меңәрләгән малайҙар өсөн өлгө булып тора. Бында бәләкәй малайҙарҙы күрһәм, күңелемдә ҡоштар талпынған кеүек. Мин беләм, был һарайҙан улар ысын ир-егет булып сығасаҡ. Физик яҡтан көслө булып ҡына түгел, ә иң мөһиме - ир-егеттең кем икәнен, үҙен нисек тоторға һәм үҙ ғүмерен нисек үткәрергә тейешлеген дөрөҫ күҙалларға өйрәнеп сығасаҡ", - тигәйне республика Башлығы Көрәш һарайын асыу тантанаһында. Әйткәндәй, ошо монументаль бинала октябрҙә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумы үткәреү планлаштырыла.

12+

БАШ ҠАЛАМ

# ТУҒАНДАРЫМ БАҺАЛАНЫ




**Баш ҡалабыҙҙың матур юбилейы сиктәрендә күркәм саралар уҙҙы, өфөләр ҙә, ҡала ҡунаҡтары ла рәхәтләнеп ял итте. Беҙ ҙә алыҫ тарафтарҙа йәшәгән туғандарҙы йыйып, Өфөбөҙҙөң байрамын бергәләп билдәләнек. Үҙебеҙ ошо ҡалала йәшәгәс, унда булған үҙгәрештәрҙе әллә ни күҙгә элеп бармайбыҙ, ә ситтән килеүселәр уны шунда уҡ күрә. Шулай итеп, уларҙың Өфөгә ҡағылышлы фекерҙәре-уйҙары менән таныштырып үткем килә.**

Бәләкәй балалары булғандар тәү сиратта ҡаланың кескәйҙәр өсөн уйланылған булыуын күрҙе һәм Өфө ихаталарында урынлашҡан балалар майҙансыҡтарының ҙур, заманса, төрлө тематикаға бәйле булыуын, хатта йорттар араһындағыларҙың янында спорт менән шөғөлләнеү өсөн йыһаҙлар ҡуйылыуын бик отошло тип билдәләне.

Байрам саралары башланған көндә, 30 августа, Ленин майҙаны гөрләп торҙо. "Өфө йүкәләре" йырын тиҫтәләгән музыканттың бергә башҡарыуы һоҡландырҙы. Ленин урамында ҡала етәксеһе Ратмир Мәүлиевтың республика һәм Рәсәй ҡалалары башлыҡтары менән берлектә йүкә ағастары ултыртып, "Ҡалалар дуҫлығы аллеяһы"на нигеҙ һалыуын да ҡыҙыҡһынып күҙәттек.

1 сентябрҙә лә ҡала урамдарын ҡыҙырҙыҡ һәм осраҡлы рәүештә "Өфө шиғри трамвайы"нда йөрөү бәхетенә өлгәштек. Пушкин урамы менән Дәүләт циркы араһындағы маршрутта йөрөгән трамвайға ултырып алып, тәҙрә аша ҡала тормошон байҡаныҡ. Әйткәндәй, Дәүләт циркының оҙаҡламай төҙөкләндерелеп, яңынан сафҡа индерелеү хәбәрен бала сағы ошо ҡалала үткән ҡустым: "Заманында Өфөлә йәшәгән балаларҙың ғына түгел, тотош республика бәләкәстәрен һәм ололарын үҙенә тартып торған урын ине. Уға яңы һулыш өрөргә тырышҡан республика һәм ҡала етәкселегенә рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ", - тип шатланып ҡабул итте.

Бер нисә аҙна элек Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев башҡорт теленә яҙылған алтаҡталарҙағы хаталарҙы төҙәтергә саҡырып мөрәжәғәт иткәйне. Бик хуп башланғыс! Мин ихлас ҡушылдым был акцияға һәм электән үк телефоныма төшөрә килгән фотоларҙы тейешле чатҡа ебәрә һалдым. Күмәкләп башланған эш үҙ һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмай - тиҫтәнән ашыу алтаҡтала хаталар төҙәтелгән дә инде, ә ҡалғандарында эш дауам итә. Ошо мәсьәлә даими рәүештә контролдә булырға тейештер, тип уйлайым.

Спорт! Спортҡа ҙур урын бүленгән дәүләттә, ҡалала һәр ваҡыт үҫеш була, сөнки ул характерҙы сыныҡтыра, һаулыҡты нығыта. Шуға күрә мин спортҡа бәйле һәр яңылыҡты ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алам. Бергике йылдан Ғафури паркында барлыҡҡа киләсәк саңғы базаһына ла ҙур өмөттәр бағлайым. Ҡышҡы спортҡа балаларҙы ла, ололарҙы ла әүҙем йәлеп итеү мөһим, шуға күрә был базаның бик урынлы һәм кәрәкле булыуын билдәләйем.

Мин үҙем хайуандарҙы яратам, өйҙә бесәйебеҙ бар, аквариумда балыҡтар йөҙөп йөрөй. Урамда ла, хужалары рөхсәт итһә, эттәрҙе һыйпап-яратып үтәм. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, ҙур-ҙур эттәрҙе бәйһеҙ, морондоҡһоҙ алып йөрөүселәр менән осрашып, ҡүнел төшә ине. Шуға күрә, күптән түгел Башҡортостан Ҡоролтайы депутаттары тарафынан ҡабул ителгән яңы ҡағиҙәләрҙе шатланып ҡаршы алдым. Хәҙер бейеклеге 30 сантиметрҙан ҙур булған эттәр мотлаҡ йә бәйҙә, йә морондоҡта булырға тейеш. Һәм, иң мөһиме, ҙур эттәрҙе 14 йәше тулмаған балалар менән тышҡа сығарыу тыйыла. Ҡағиҙәне боҙоусыларға штраф ҡаралған. Бик тә урынлы ҡарар.

**Әмир СӘЙФУЛЛИН,**
**водитель.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***"Башҡортостан, алға!" тигән саҡырыу һөҙөмтәләр килтерә, республикабыҙҙа һәр өлкәлә барлыҡҡа килгән матур үҙгәрештәр, ҡаҙаныштар, яңылыҡтар ҡыуандыра. Улар хаҡында ни әйтерһегеҙ?***

***Андрей НАЗАРОВ, БР Хөкүмәте Премьер-министры:*** Башҡортостан һуңғы биш йылда күҙгә күренерлек уңыштарға өлгәште. 2023 йыл йомғаҡтары буйынса республика инвестицион климат торошоноң милли рейтингында 3-сө урын биләне. Һуңғы дүрт йылда Башҡортостан сәнәғәт үҫешендә юғары темптарҙы һаҡлап килә һәм быйыл алдынғы өс төбәк иҫәбендә беренсе урынды яуланы. Ғөмүмән, республикабыҙ ниндәйҙер ҡаҙаныштарға өлгәшә икән, бында беҙ, әлбиттә, РФ Президенты Владимир Путин башланғысындағы милли проекттарға һәм уларҙы бойомға ашырыуға рәхмәтлебеҙ. 2018 йылда ҡабул ителеп, Рәсәй төбәктәрендә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, 2019 йылдан бирле гәмәлгә ашырылыусы 14 милли проект быйыл тамамланасаҡ. Февралдә үк әле Владимир Путин, 2030 йылға тиклем илдә тағы ла бер нисә яңы проект эш башлаясаҡ, тигәйне һәм улар киләһе йылдан старт аласаҡ. Ҡайһы берәүҙәр уйлауынса, тәүҙә - пандемия, аҙаҡ Махсус хәрби операция арҡаһында милли проекттарҙы финанслау кәметелде, тигән фекер төптә дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, былтыр Башҡортостанда ошо маҡсаттар өсөн аҡса бүлеү, киреһенсә, 1,5 тапҡырға арттырылды, ә федераль тәьминәт 1,9 тапҡырға күберәк йүнәлтелде. Йәғни беҙ 2019-ҙан 2023 йылға тиклемгә 5 йыл эсендә милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн республикала 172 млрд, шул иҫәптән федераль ҡаҙнанан 116,7 млрд һум аҡса тотонғанбыҙ. Мәктәптәр һәм балалар баҡсалары, дауаханалар һәм поликлиникалар төҙөнөк, юлдар һалындыһәм йүнәтелде, кешеләр авария хәлендәге йорттарҙан күсерелде һ.б.



Аныҡлабыраҡ әйткәндә, Өфөлә һәм Әбйәлил районында 400-әр урынлыҡ ике балалар баҡсаһы, ябыҡ футбол майҙаны һәм баш ҡалабыҙҙа ишеү слаломы өсөн ҡоролма комплексы төҙөргә насип булды. "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә 2019 йылдан алып барлығы 15 мең урынлыҡ 29 мәктәп төҙөлдө, шуларҙың туғыҙы ҡарамағында балалар баҡсаһы урынлашҡан. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты ярҙамында Өфөнөң Затон микрорайонында Республика балалар онкологияһы һәм гематология үҙәге асылыуы, ғөмүмән, төбәк кимәлендә генә түгел, федераль кимәлдә лә мөһим ваҡиға булды. Ундағы заманса ҡорамалдар, юғары квалификациялы табиптар, уңайлы эш һәм ял шарттары бик күп балалар һәм уларҙың ғаиләләре өсөн өмөт усағы ҡабыҙасаҡ. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡта, Ҡырмыҫҡалыла, Дүртөйләлә, Мәсәғүттә һәм Туймазыла балалар өсөн поликлиникалар төҙөп тапшырылды. Оло Ыҡтамаҡ ауылында иһә дауахана эшләй башланы. Былар, әлбиттә, барлыҡ ҡаҙаныштарыбыҙҙың аҙ ғына өлөшө булһа ла, һуңғы йылдарҙа ошо йүнәлештәге эштәребеҙҙең ҡоласын бик асыҡ күрһәтеп тора. Быйыл ғәмәлгә ашырыласаҡ ниәттәр иҫәбендә өс "Кванториум" балалар технопарҡы, бер нисә мәктәпте сафҡа индереү, Кушнаренкола поликлиника асыу, Республика "Именлек" геронтология үҙәге корпусын һәм вуз-ара студенттар кампусының икенсе сираттарын төҙөп тапшырыу ҡарала. Киләһе йылдан илебеҙ милли проекттарҙы ғәмәлгә ашырыуҙың яңы, өсөнсө этабына аяҡ баҫа. Улар араһында "Ғаилә", "Рәсәй йәштәре", "Оҙайлы әүҙем тормош" проекттары бар. Беҙ башланған эштәребеҙҙе дауам итеп, республикабыҙ үҫешен артабан да тәьмин итәсәбеҙ һәм йәштәребеҙҙең ошонда эшләп, матур, татыу ғаиләләр ҡороп йәшәгеләре килеп торһон өсөн тырышасаҡбыҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Владимир Путин "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 80 йыл" юбилей миҙалын булдырҙы. Юбилей миҙалы менән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары - хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм үҙ теләге менән ялланғандар, тыл хеҙмәтсәндәре, гетто һәм концлагерҙарҙың элекке балиғ булмаған әсирҙәре, СССР Хәрби Көстәренең хәрби формированиелары составында һуғышҡан сит ил дәүләттәре граждандары бүләкләнә.

✓Башҡортостанда ураҡ эштәре әүҙем бара. Мәҫәлән, 550 мең гектар майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары сабылған, был иһә пландың 34 процентын тәшкил итә. 1,3 миллион тонна ашлыҡ бураға һалынған. Уртаса уңыш - гектарынан 24 центнер. Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Хөкүмәт вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов ошо турала белдерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә идара итеү командаһына Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан төҙөлә башлаған барлыҡ объекттарҙы тамамларға ҡушты. "Беҙ юбилейға оҙаҡ ҡына әҙерләндек, бик күп объекттарҙы тәртипкә килтерҙек. Әммә 450 йыллыҡ юбилей быйыл менән генә тамамланмай. Беренсенән, вәғәҙә иткән эштәрҙе аҙағынаса еткереү мөһим. Ғөмүмән, Өфөнөң үҫеш темптарын кәметергә ярамай, бында ла яҡшы итеп эшләргә кәрәк", - тине республика етәксеһе.

✓Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондының республика филиалында булды. Хәбәр ителеүенсә, филиал 2023 йылдың 1 июненән үҙ эшен башланы. Бөгөн унда 97 социаль координатор эшләй. Төп мәсьәләләр - ярҙам сараларын тәғәйенләү; юридик һәм медицина ярҙамы; хәрби хәрәкәттәр ветераны танытмаһын алыу; Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуға бәйле федераль һәм төбәк түләүҙәре.

✓Башҡортостандың Милли музейында Радий Хәбиров "Өфөлә Кремль йондоҙҙары яҡтылығы. Владимир Нуждиндың гравюраларында һәм миниатюраларында Рәсәй тарихы" күргәҙмәһен асыу тантанаһында ҡатнашты. Экспозиция төбәктең баш ҡалаһының 450 йыллығына арнала. Рәссам Башҡортостан өсөн Шайморатов генерал миҙалы һәм ордены, Григорий Аксаков ордены, "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы билдәләренә заказдар үтәгән.

✔ **АҠШ Ҡоралллы көстәренең отставкалағы офицеры Дэниел Дэвис белдереүенсә, Украина ғәскәренең Курск өлкәһенә ҡыҫымы йомшара бара: улар ҙур һанда кешеләрен һәм техникаһын юғалтып, сигенергә мәжбүр.**



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***"Башҡортостан, алға!" тигән саҡырыу һөҙөмтәләр килтерә, республикабыҙҙа һәр өлкәлә барлыҡҡа килгән матур үҙгәрештәр, ҡаҙаныштар, яңылыҡтар ҡыуандыра. Улар хаҡында ни әйтерһегеҙ?***

***Ленара ИВАНОВА, БР Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры:*** Беҙҙең ведомство исеме үҙгәртелеп, тәүге урынға "ғаилә" һүҙенең өҫтәлеүе бер ҙә осраҡлы булманы, әлбиттә. Ғаилә һәм бала мәсьәләләре бөгөн дәүләт сәйәсәте кимәлендә иң беренсе сираттағы ҡиммәттәрҙең береһенә әйләнде. Бер кемгә лә сер түгел: илдә тыуым кимәлен арттырырға кәрәк, ә быны өсөн иһә ғаиләләр ишәйергә тейеш. Ә инде ғаиләләр үҙҙәре күпме теләй, шул хәтлем бала үҫтерһендәр өсөн, билдәле, тейешле шарттар һәм социаль яҡлау саралары кәрәк. Бынан тыш, беҙгә ғаиләләрҙең ныҡлығы, татыулығы өсөн дә күп көс һалырға тура килә. Айырыуса йәш ғаиләләр ҡурсалауға мохтаж, тип әйтер инем.



Бөгөн Башҡортостанда 166 мең самаһы йәш ғаилә иҫәпләнә, шуларҙың 79 меңендә балалар тәрбиәләнә. Мәғлүм булыуынса, республикала "Башҡортостан Республикаһында йәш ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында" закон ғәмәлдә. Әгәр беҙҙә 309 мендән ашыу балалы ғаилә һәр төрлө социаль ярҙам саралары менән файҙаланһа, шуларҙың 27 меңе - йәш ғаиләләр. Ғөмүмән, балалы ғаиләләрҙең тормош хәле РФ Президенты Владимир Путиндың айырым иғтибар үҙәгендә. "Күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында" Президент Указына ярашлы, Башҡортостан кимәлендә лә, балалар һанына һәм ғаиләнең матди хәленә ҡарамаҫтан, бала тыуған һәр бер ғаилә дәүләт ярҙамына иҫәп тота ала. Был ярҙам бөгөн төрлө форматта бойомға ашырыла: 1) түләүҙәр, пособие һәм компенсациялар; 2) торлаҡ шарттарын яҡшыртыу программалары (льготалы ипотека һәм торлаҡ өсөн түләүҙәр); 3) башҡа төр социаль ярҙам (социаль контракт, уҡытыу һәм квалификация күтәреү, төбәк ярҙамы).

Ғаилә йылы тип нарыҡланып, быйылғы йыл Рәсәйҙә өс йәки унан күберәк бала тәрбиәләнгән ғаиләләрҙең күп балалы ғаилә статуҫын указ нигеҙендә нығытыуҙан башланды. Бындай ғаиләләр Башҡортостанда 59 мендән ашыу һәм уларҙың бөтәһе лә федераль һәм төбәк льготалары менән файҙалана. Мәҫәлән, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә 30 процент ташлама, 6 йәшкә тиклемге балаға бушлай дарыуҙар, мәктәптә уҡыған балаларға бушлай иртәнге һәм төшкө аш, бушлай мәктәп формаһы һәм спорт кейеме, йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү хоҡуғы һәм башҡа күп кенә ташламалар ҡарала, ер участкаһы бирелә. Башҡортостанда, мәҫәлән, күп балалы ғаиләләр мәҙәни учреждениеларға бушлай йөрөй ала.

Ә бына 1 июлдән республикала күп балалы ата-әсә урта һөнәри белем биреү программаһы буйынса колледжда түләп уҡыусы балалары өсөн йыллыҡ түләү хаҡының яртыһын кире ҡайтарып алыу мөмкинлегенә эйә булды. Бындай уҡыу йорттарының Башҡортостанда бөтәһе йөҙҙән ашыу булыуын иҫәпкә алһаҡ, был республика ҡаҙнаһы өсөн байтаҡҡа барып баҫҡан хәлдә лә балалы ғаиләләр мәнфәғәте дәүләт өсөн беренсе урында тороуын күрәбеҙ. Балаһын колледжға уҡырға биргән ата-әсә тағы ла шуныһын да хәтеренә киртеп ҡуйһын: бындай ташламаға күп балалы ғаиләнең ниндәй матди хәлдә һәм етешлектә йәшәүе шарт булып та тормай. Компенсация көндөҙгө бүлектә уҡыусы 23 йәшкә тиклемге студентҡа бирелә, уның күләме йылына 30 меңдән дә артмаҫҡа тейеш. Был турала "Күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында" республика законына былтыр БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай тарафынан төҙәтеү индерелгәйне һәм мин уны йомарт демографик сара булараҡ баһалайым.

Республикала балалы ғаиләләр өсөн эшләнгән тағы ла бер ата-әсәләрсә йомартлыҡ билдәһе - ул Башҡортостандағы 25 меңләп баланың бушлай сифатлы һөт һәм һөт ризыҡтары менән тәьмин ителеүе. Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Нефтекама, Белорет, Сибай, һәм Үрге Ҡыйғылағы "Һөт кухняһы" балаларҙан тыш, йөклө ҡатындарҙы, бала имеҙгән әсәләрҙе, шулай уҡ Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләрен дә тәьмин итә. "Беҙ был эште башлағанда, "Һөт кухняһы " Өфөлә генә булып, 3 мең кешене генә хеҙмәтләндерә ине. Бөгөн был сифатлы һөт ризыҡтары менән күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге ике тиҫтәнән ашыу мең бала тәьмин ителә. Шуныһы мөһим: һөт кухняһы мәктәп туҡланыуы рационына ла индерелде",- тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров халыҡ-ара 32-се "АгроКомплекс" күргәҙмәһен асҡанда. Эйе, балалы ғаиләләргә ярҙам - Башҡортостанда социаль сәйәсәттең өҫтөнлөклө йүнәлешенә әүерелде. Мин хәтта "Беҙ ғаилә ҡиммәттәрен күтәрмәләүҙә илдә беренселәрҙәнбеҙ", тип әйтер инем.

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# "ҺАБАҠ КӨНӨ" ҮТКӘРЕЛДЕ



**Украина Ҡоралллы көстәре Рәсәйҙең көньяҡ-көнбайыш сиктәре төбәктәрендә башбаштаҡлығын дауам итә. 31 август төнөнә ҡарай ВСУ Белгород өлкәһенә һөжүм яһаны. Күп ҡатлы йорттарға ракеталар төшөп, 46 тыныс граждан яраланды, 5 кеше һәләк булды. Зыян күреүселәр һаны арта бара...**

Курск өлкәһенә үтеп инергә маташыуҙар Киев режимына ҡиммәткә төшә. 1 сентябрҙә Рәсәй армияны Украина өсөн "Рәсәй Ҡоралллы көстәренең көсө нимәлә?" тигән темаға "һабаҡ көнө" үткәрҙе: баллистик ракеталар менән Долгинцево аэродромының көлө күккә осоролдо, ә Харьковта күп тонналы фугас авиабомбалары трактор заводының бер нисә цехын юҡ итте. "Московский комсомолец" аҙналығы хәбәр итеүенсә, хәрби телеграм-каналдар Курскиҙа күпләп әсирғә төшкән украин һалдаттарынан һорау алыуҙар кадрҙары менән тулды. Ҡаты бәрелештәр арҡаһында Украина хәрби төркөмдәре ҙур юғалтыуҙар кисерә. Рәсәй ғәскәрҙәренең төп бурысы - тырым-тырағай килтерелгән дошман төркөмдәрен тулыһынса юҡ итеү, уларҙы ҡорал резервтарынан һәм, иң мөһиме, яғыулыҡтан мәхрүм итеү.

Шулай итеп, АҠШ Ҡоралллы көстәренең отставкалағы офицеры Дэниел Дэвис белдереүенсә, Украина ғәскәренең Курск өлкәһенә ҡыҫымы йомшара бара: улар ҙур һанда кешеләрен һәм техникаһын юғалтып, сигенергә мәжбүр. Тәүлек эсендә генә лә Курск йүнәлешендә ВСУ-ның (Украина Ҡоралллы көстәре) 400-ләгән һалдаты юҡ ителде.

Әйткәндәй, Германияның бер төркөм йәмәғәт эшмәкәрҙәре Икенсе бөтә донъя һуғышы башланыуға 85 йыл тулыу уңайынан Berliner Zeitung гәзите аша Берлин менән Парижды Украиналағы конфликтты тиҙерәк бөтөрөү өсөн сығыштарға ҡушылырға саҡырҙы. "Беҙ талап итәбеҙ: ҡоралды һалығыҙ! Беҙ Германия Федератив Республикаһы хөкүмәтен Франция һәм Европа партнерҙарын Украина менән Рәсәй Федерацияһына аныҡ тәҡдимдәр менән мөрәжәғәт итергә саҡырабыҙ. Маҡсат - утты туктатыу, ә аҙаҡ бер ниндәй шарттар ҡуйып тормаҫтан, тыныс һөйләшеүҙәргә күсеү. Хәүефһеҙлеккә фәҡәт бергәләп кенә өлгәшергә мөмкин!" Саҡырыу аҫтына сәйәсмәндәр, ғалимдар һәм журналистар иҫәбенән 30-лап кеше ҡултамғаһын ҡуйған. Ысынлап та, Яңы көн Рәсәй мәғлүмәт агентлығы яҙып сығыуынса, "Мәскәү менән Вашингтондың мөнәсәбәттәре иң сикке хәлгә килеп етеүен, ә яҡшырыуға табан бер ниндәй өмөттөң юҡлығын" күрмәү мөмкин түгел бөгөн. Был башҡа күп проблемалар менән бергә Рәсәйҙең сауҙа һәм үҙ-ара иҫәп-хисап ғәмәлдәренә лә ҙур тотҡарлыҡ яһай. Мәҫәлән, АҠШ-тың икенсе тапҡырға санкциялар менән янауынан һуң Рәсәйгә Ҡытай менән иҫәп-хисап башҡарыуҙар проблемаға әйләнде, тип яҙа Reuters. Иҫәп-хисап өлкәһендә тотҡарлыҡтар һәм сығымдар арта бара, ә раҫланмаған транзакциялар күләме тиҫтәләрсә млрд юань тәшкил итә.

News.ru хәбәр итеүенсә, Көнбайыш сәйәсәте арҡаһында Рәсәй ядро доктринаһын ҡайтанан ҡарап сығырға һәм уға үҙгәрештәр индерергә мәжбүр буласаҡ, сөнки АҠШ-тың Украиналағы конфликтта үҙ көстәрен Рәсәй сиктәренә күсереүе һәм Вашингтондың Украина ғәскәрҙәре менән бергә Рәсәйҙең төпкөл биләмәләренә үтеп инергә әҙер тороуы милли хәүефһеҙлек мәсьәләһен ҡуҙғата һәм Рәсәйгә доктринаның иң версияһын ҡарауҙан башҡа юл ҡалдырмай, ти РФ Сит ил эштәре министры урынбаҫары Сергей Рябков.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Төбәк Башлығы Радий Хәбиров шулай уҡ Рәсәй анимацияһы тарихына арналған күргәҙмәне һәм "Союзмультфильм" - "Тылсымлы анимация донъяһы" киностудияһын асыу тантанаһында булды. Экспозицияла мультипликация донъяһының нисек үҙгәреүен күрергә, шулай уҡ популяр мультфильмдарҙан әҙәктәр ҡарарға мөмкин. Республика етәксеһе Радий Хәбиров "Союзмультфильм"дың Башҡортостандың мөһим партнеры булыуын билдәләне.

✔Башҡортостан Башлығы "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" республика иң яҡшы тәжрибәләр фестивален йомғаҡлау этабында ҡатнашты. Был сара Башҡортостан Башлығы гранты иҫәбенә уҙғарыла. Уның маҡсаты - өлкән быуын кешеләренең мөмкинлектәрен асыу, уларҙың донъяға социаль яраҡлашыуы һәм әүҙем тормош дауам итеү өсөн иң яҡшы башланғыстарҙы асыҡлау һәм таратыу. Республика конкурсында Благовещен, Дәүләкән, Ҡалтасы, Стәрлебаш, Өфө, Янаул райондарынан, Сибайҙан һәм Өфөнөң Октябрь районынан һигеҙ команда гран-при яуланы.

✔Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы "Атай ҡаһарманлығы" конкурсына йомғаҡ яһаны. Бүләкләү тантанаһына, лауреаттарҙан һәм уларҙың яҡындарынан тыш, абруйлы ҡунаҡтар саҡырылғайны. Билдәләнеүенсә, һуңғы биш йылда республикала ғаилә ҡиммәттәрен яҡлауға бәйле мәсьәләләргә етди иғтибар бүленә. Ғаилә институтын нығытыуға, ғаилә һәм социаль өлкәләрҙә ир-аттың статусын күтәреүгә йүнәлтелгән башланғыстар хуплау таба. Быйыл бишенсе тапҡыр тапшырылған "Атай ҡаһарманлығы" йәмәғәт наградаһы быға асыҡ миҫал булып тора.

✔Ишембайҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла һәләк булған Айҙар Хисмәтуллин, Юлай Шәрәфетдинов, Фидан Шафиҡов, Самат Насыров, Руслан Байтимеров, Эдуард Тихонов, Вәкил Фәтҡуллин, Тәлғәт Кинйәбузовтарҙың ғаиләләре менән осрашты. Төбәк етәксеһе һәләк булған хәрбиҙәрҙең ғаиләләренә ҡайғы уртаҡлашыуын белдерҙе һәм Шайморатов генерал орденлары тапшырҙы. Яугирҙар был наградаларға хәрби бурыстарын үтәгәндә батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ күрһәткәндәре өсөн лайыҡ булды.

✔Рәсәйҙә ҡыштың яуым-төшөмлө, йылы булыуы фаразлана. Был хаҡта "Фобос" һауа торошо үҙәге белгесе Евгений Тишковец хәбәр итте. Белгес һүҙҙәренсә, яҡынса күҙаллауҙар буйынса, декабрҙә температура нормаһан уртаса өс градусҡа, ғинуарҙа - биш-ете, февралдә бер-ике градусҡа юғарыраҡ булыуы, ҡарҙың 20-30 процентҡа күберәк яуыуы көтөлә.

✓ *Башҡортостан ғәжәп матур, милли йолалары һәм рухи ҡиммәттәре менән бай. Был индустриаль иҡтисади үҙәк, ҡунаҡсыллыҡ биләмәһе. Капсула Өфөнөң 450 йыллығын билдәләгәндә һалыныуы менән бигерәк тә иҫтәлекле.*



ҠЫҪҠАСА

# РЕСПУБЛИКА КӨНӨНӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда Республика көнөнә әҙерләнеү һәм уны үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Ойоштороу комитетына 2024 йылда Республика көнөн билдәләү өсөн саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. Муниципалитеттарға октябрь айында ҡалаларҙа, муниципаль райондарҙың һәм ауыл биләмәләренең административ үҙәктәрендә Республика көнөнә арналған тантаналы саралар уҙғарырға, шулай уҡ учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт символикалары менән биҙәргә, Республика көнөнә арналған мәҙәни һәм спорт саралары ойошторорға, ҡала һәм ауылдарҙа йәрминкәләр үткәрергә тәҡдим ителде. Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы байрам саралары ваҡытында йәмәғәт тәртибен һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итергә бурыслы. Указ ҡул ҡуйған көндән көсөнә инде.

✓ **Башҡортостанда илдең Оборона министрлығы менән контрактҡа ҡул ҡуйған граждандарға артырылған түләү ваҡыты оҙайтылды.** Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйған. Был хаҡта Горобзор мәғлүмәт-янылыҡтар порталы хәбәр итә. Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса контрактсыларға түләү суммаһы 205 мең һумдан 505 мең һумғаса арттыы һәм 10 июлдән түләнә башланы. Ярҙам сараларын 2024 йылдың 31 августына тиклем алырға мөмкин ине. Указға ярашлы, хәҙер арттырылған түләүҙәр ваҡыты ағымдағы йылдың 31 октябренә тиклем оҙайтылды. Рәсәй Президенты 1 августан 31 декабргә тиклем Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу өсөн контракт төҙөгән граждандарға 400 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны. Шулай итеп, федераль түләү менән бергә Башҡортостандың хәрби хеҙмәткәрҙәре бер тапҡыр 1 миллион 205 мең һум аҡса алырға мөмкин.

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре йәнә бер льготанан файҙаланырға мөмкин. Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйған.** Документтан күренеүенсә, Башҡортостанда 14 йугирҙың ғаиләһенә торлаҡ һатып алыу өсөн социаль түләү тәғәйенләнә. Хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам сараһы "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә төбәк бюджетынан финанслау ярҙамында тормошҡа ашырыла. "Ағымдағы йылда былдай социаль түләүҙе Башҡортостандың 11 районынан 14 хәрбиҙең ғаиләһе алырға хоҡуҡлы. Уның күләме торлаҡ хаҡының 70 процентын тәшкил итә. Ҡалған 30 процентын программала ҡатнашыусы үҙе түләй. Был аҡсаны йорт төҙөгәндә, шулай уҡ әҙер торлаҡ һатып алғанда ҡулланырға мөмкин. Төп шарт - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы йәки уның ғаилә ағзаһы "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" программаһында ҡатнашырға тейеш. Икенсе төрлө әйткәндә, программа сиктәрендә торлаҡ шарттарын яҡшыртырға теләгән граждандарҙың дөйөм исемлегендә торорға кәрәк", - тине БР Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАЙЛАУҒА БАРМАЙ ҠАЛМА!

**Республиканың һайлау системаһы 2024 йылдың 6, 7 һәм 8 сентябрендә тауыш биреүҙе үткәрергә әҙер. Был турала Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе.**

"Төбәктә 218 һайлау кампанияһы (Башҡортостан Республикаһы Башлығын һайлау, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлау һәм урындағы үҙидараның вәкиллекле органдарына депутаттар һайлау буйынса 216 һайлау кампанияһы) бара, - тине Азат Ғәлимханов. - Һайлауға әҙерлек өсөн республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы, 69 территориаль һайлау комиссияһы, 3302 участка һайлау комиссияһы яуаплы. Мәскәүҙә бер комиссия төҙөлдө".

Республика Башлығын һайлауҙа барлыҡ парламент партияларынан биш кандидат ҡатнаша, Дәүләт Йыйылышы депутатын өҫтәмә һайлауҙа мандат өсөн өс кандидат көрәшә. Муниципаль кимәлдәге һайлауҙа һайлау кампанияларында 4435 кандидат ҡатнаша. Бөтә кимәлдәге һайлауҙа 10 сәйәси партиянан кандидаттар теркәлгән. Һайлау кампанияларында 3 миллионға яҡын кеше тауыш бирә ала.

Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе хәбәр итеүенсә, бөгөнгә Башҡортостан Башлығын һайлау, башҡа һайлау буйынса һайлау бюллетендәрен әҙерләү һәм республиканың территориаль комиссияларына тапшырыу эше тамамланған. Хәҙер һайлау бюллетендәре барлыҡ участка һайлау комиссияларына таратыла. "Был ҙур, яуаплы сара. Һәр етәксе үҙ бурысын үтәргә тейеш. Ул ябай - кешеләрҙең тыныс, хәүефһеҙ һәм уңайлы тауыш бирә алыуы", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Һайлауҙы тыныс шарттарҙа, байрамса мөхиттә үткәреү, йәрминкәләр ойоштороу, бүләктәр уйнатыу планлаштырыла, тип хәбәр итте ул.

# ПУТИН ҠОТЛАНЫ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостан халҡын Өфөнөң 450 йыллығы менән ҡотланы. Уның ҡотлау телеграммаһында былай тиелә:**

"Ҡәҙерле дуҫтар! Һеҙҙе Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә нигеҙ һалыныуға 450 йыл тулыу уңайынан ҡотлайым. Был һоҡланғыс юбилей - ҡаланың бай тарихына мөрәжәғәт итеү, Өфөнөң хәрби батырлыҡтары һәм хеҙмәт ҡаҙаныштары, фәнни, ижади уңыштары һәм спорт триумфтары менән данлаған күренекле яҡташтарығыҙҙың исемдәрен иҫкә алыу өсөн бик яҡшы сәбәп.

Шуныһы мөһим: ҡала, үҙенең үҙенсәлекле ҡиәфәтен һаҡлап, киләсәккә ынтыла. Уның иҡтисады һәм социаль өлкәһе йылдам үҫешә, заманса юғары технологиялы производстволар асыла, яңы мәктәптәр, театрҙар, мәҙәниәт һарайҙары, стадиондар төҙөлә. Һәм, әлбиттә, Өфөлә күләмле халыҡ-ара форумдар, абруйлы спорт турнирҙары үткәреү өсөн барлыҡ шарттар ҙа булдырылған. Был уңыштарҙың нигеҙендә төрлө милләт, дин һәм мәҙәниәт кешеләре араһындағы ихтирам һәм үҙ-ара аңлашыу традициялары, Өфө халҡының инициативаһы һәм эшһөйәрлеге, алдарына юғары маҡсаттар ҡуйыу һәм һөҙөмтәгә өлгәшеү һәләте ята. Тыуған ҡалағыҙға ҡарата һөйөү, уның сәскә атыуына ихлас өлөш индереү теләге артабан да һеҙгә Башҡортостан һәм бөтә Рәсәй мәнфәғәтенә йүнәлтелгән ниәттәрегеҙҙе тормошҡа ашырыуға ярҙам итер, тип ышанам. Иң изге теләктәр һеҙгә. Байрам менән!

Владимир Путин".

# КИЛӘСӘККӘ ТӨБӘП...

**Өфөнөң 450 йыллығын байрам итеү сиктәрендә, Ағиҙел йылғаһы буйында "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы янында киләсәк быуындарға мөрәжәғәт менән "Ваҡыт капсулаһы"н һалыу тантанаһы үтте.**



Ҡаланың 400 йыллығы хөрмәтенә һалынған "Ваҡыт капсулаһын" асыу тантанаһы 12 июндә, Рәсәй көнөндә һәм Өфө ҡалаһы көнөндә, Ағиҙел йылғаһы буйында үткәйне. Өфөнөң 500 йыллығына арналған яңы капсула урындағы етештереүселәрҙең брендлы сувенир продукцияһын, Башҡортостандың спорт клубтары атрибутикаһын, баҫма продукцияны, хәҙерге Өфө һәм уның социаль-иҡтисади күрһәткестәре тураһында туристик буклеттарҙы, шулай уҡ легендар йырҙар, видеороликтар менән дискталарҙы, ҡағыҙ баҫмаларҙың юбилей сығарылыштарын - барлығы 100 төр предметты - үҙ эсенә ала.

Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров баш ҡала халҡын мөһим ваҡиға айҡанлы ҡотланы. "Бөгөн киләсәк быуындарыбыҙ менән әңгәмә ҡороу мөмкинлегебеҙ бар. Беҙ хатты тиҫтәләгән йылдар үткәс йәшәйәсәк быуынға юллайбыҙ, улар тауышыбыҙҙы ишетһен, беҙҙе низәр борсоғанды тойһон, бөгөнгө һәм иртәгәге көн ҡиммәттәрен һәм ҡаҙаныштарын сағыштырһын өсөн, - тип билдәләне Игорь Комаров. - Башҡортостан ғәжәп матур, милли йолалары һәм рухи ҡиммәттәре менән бай. Был индустриаль иҡтисади үҙәк, күп милләтле мәҙәниәт һәм ҡунаҡсыллыҡ биләмәһе. Капсула ҡала һәм тотош республика халҡы өсөн мөһим көндә - Өфөнөң 450 йыллығын билдәләгәндә - һалыныуы менән бигерәк тә иҫтәлекле".

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сәләмләү һүҙендә республикала быуындар күсәгилешлегенә ҙур иғтибар бүленеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Беҙгә тиклемге быуын - 1970 йылдарҙағы Өфө халҡы - ҙур теләк менән хеҙмәт иткән, яңы урамдар һәм проспекттар, торлаҡ кварталдары һәм социаль объекттар төҙөгән, киләсәккә ышаныс менән ҡараған. Үҙҙәренең мөрәжәғәтнамәһендә улар беҙгә республиканы һәм уның баш ҡалаһын яратыуҙы васыят итеп тапшырған, - тине төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. -Киләсәк быуындар ҙа тыуған Башҡортостаныбыҙҙы һәм бөйөк Рәсәйҙе яратыр, киләсәккә ышаныслы ҡарар һәм "өфөлө" исемен лайыҡлы йөрөтөр, тип ышанабыҙ".

# БАШЛАНДЫ!

**Башҡортостандың мәғариф министры уҡыусыларҙы һәм студенттарҙы, уҡытыусыларҙы һәм ата-әсәләрҙе яңы уҡыу йылы башланыуы менән ҡотланы.**

Министр уҡытыусыларға бөтмәҫ көс-илһам һәм түҙемлек теләне. Уҡытыусылар - бала саҡты оло тормош менән тоташтырған тәүге күпер, сөнки улар характерҙы форма-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓1 сентябрҙә Совет майҙанында студенттар өсөн Белем көнөнә арналған ҙур концерт булды. Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы "Йырла, бейе, студент!" шоу-программаһын тәҡдим итте. "Беҙҙең шоуҙың маҡсаты - йәштәрҙе музыка мәҙәниәтенә йәлеп итеү, - тине Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Илнур Хәйруллин. -Заманса эшкәртеүҙәге элекке йырҙар йәш меломандар араһында бик популяр. Шуға ла концерт программаһы студенттарҙы ҡыҙыҡһындырыуға йүнәлтелгән".

✓Башҡортостандан еңел атлет Антон Кулятин Парижда Паралимпия уйындарының бронза призеры булды. Спортсы 1500 сажрымға йүгереүҙә өсөнсө булып килде (3:44.94). Башҡортостан спортсыларының иҫәбендә бөтәһе өс миҙал. Бынан алда Антон Кулятин 5000 метрлыҡ арауыҡта өсөнсө булды, һөнгө ырғытыуҙа Анна Кулинич-Сорокина "бронза" яуланы. Франциялың баш ҡалаһында донъя кимәлендәге спорт ярыштары 28 августан 8 сентябргә тиклем бара.

✓Башҡортостандан самбосы Әлиә Мөхәмәтйәнова Гран-при халыҡ-ара ярыштарында еңеүсе булды. Спортсы 50 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында самбо буйынса алтын миҙал яуланы, тип хәбәр итә республиканың Спорт министрлығы. Санкт-Петербургта илдең 28 спортсыһы араһынан декабрь айында Ҡаҙанда Гран-при финалында ҡатнашыусылар һайлап алынды. Үҙенең ауырлығында Әлиә Мөхәмәтйәноваға тиңдәр булманы.

✓Башҡортостан Республикаһының Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығы ведомстволың яңы наградаһын - М.М.Вәлиев миҙалын булдырҙы. Мөхәмәтнур Вәлиев 1978-2002 йылдарҙа "Баштрансгаз" йәмғиәте етәксеһе булды. Предприятие операторын алып генераль директорына тиклем 40 йыллыҡ хеҙмәт юлы үтте. Исемле миҙал газ сығарыу, үткәргес торба транспорты, тәбиғи газды һаҡлау һәм эшкәртеү өлкәһе ойошмаларында эшләгән эшселәргә өлгәшкән уңыштары өсөн тапшырыла.

✓"Ваҡыт капсулаһы" Өфөнөң 450 йыллығы айҡанлы Өфө моторҙар эшләү берекмәһендә әҙерләнде. Калинин районы хакимиәте башлығы Ғәзизйән Әхмәтйәнов социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, был - КБ-4, баш механик идаралығы, ИЦП, ремонт цехы эшселәренең, шулай уҡ Авиация технологиялары технопаркы белгестәренең уртаҡ хеҙмәте. Капсуланың бейеклеге - 130 сантиметр, диаметры - 60 см, ауырлығы иһә 130 килограмм. Ул тутыҡмай торған ҡоростан яһалған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Шайморатов генерал ордены кавалерҙары шулай уҡ республикала Махсус хәрби операция ветерандары ассоциацияһының төбәк бүлексәһен булдырыу тәҡдиме менән сығыш яһаны.**



ТӨРЛӨҺӨНӘН

лаштыра, әхлаҡи һәм этик принциптарға нигеҙ һала. "Илебеҙҙең, һәр ғаиләнең, донъяның киләсәге - һеҙҙең ҡулда", - тип билдәләне мәғариф министры. Илдар Мәүлитбирҙин ата-әсәләргә белем биреү процесында ҡатнашыуҙары өсөн рәхмәт белдерҙе һәм быны бик мөһим булыуын билдәләне. "Ҡәҙерле балалар, һеҙҙең һәр берегеҙ - Тыуған илебеҙҙең киләсәге. Шуны онотмағыҙ: белем - ул көс, ә көс - ул яуаплылыҡ. Ҡыҙыҡһынып уҡығыҙ, яңылыҡҡа ынтылығыҙ, хаталарҙан ҡурҡмағыҙ - улар һеҙҙе көслөрәк итә. Мәктәп һеҙҙең өсөн белем алыуҙан тыш, дуҫлашыу, хыялланыу һәм маҡсатҡа ирешеү өсөн икенсе йортҡа әүерелһен. Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бөтмәҫ дәрт, ныҡышмалылыҡ һәм үҙегеҙгә ышаныс теләйем. Быйылғы уҡыу йылы шәп мөмкинлектәр һәм ҙур уңыштар осоро булһын!" - ти мәғариф министры.

## ШАЙМОРАТОВСЫЛАР КЛУБЫ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шайморатов генерал ордены кавалерҙары клубы Советының беренсе ултырышында ҡатнашты. Ул Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәле Минһаж улы Шайморатовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналды.**

Төбәк етәксеһе орден кавалерҙарының ил һәм республика үҫешенә, йәмғиәтте нығытыуға индергән өлөшөн билдәләне, шулай уҡ республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы. "Бөгөн легендар комдив, Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың тыуыуына 125 йыл тулды. Ошо мөһим көндә Клуб Советының беренсе ултырышын үткәрәбеҙ, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Шайморатов генерал ордены республикала биш йыл элек булдырылғайны, ул беҙҙең өсөн айырыуса әһәмиәткә эйә. Был орден хәрби, граждандыҡ йәки хеҙмәт бурысын үтәгәндә, ғүмеренә хәүеф янаған шарттарҙа, ғәҙәттән тыш хәлдәр ваҡытында кешеләрҙе ҡотҡарыуҙа һәм республика, ил алдындағы башҡа мөһим ҡаҙаныштар өсөн бирелә".

Республика Башлығы билдәләүенсә, Совет составына республиканың абруйлы кешеләре - Бөйөк Ватан һуғышы һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандары, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар - инген. Ҡатнашыусылар Клуб эшмәкәрлегенең пландары хаҡында фекер алышты. "Төп бурыс - тарихи хәтерҙе һаҡлауға булышлыҡ итеү, йәштәргә хәрби батырлыҡ эстафетаһын тапшырыу, йәш быуында яуаплылыҡ, илһөйәрлек, Тыуған ил алдындағы граждандыҡ бурысы тойғоһо тәрбиәләү, бөгөн Ватан сиктәрен һаҡлаған яҡташтарыбыҙ хаҡында һөйләү, - тип билдәләне төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Шул уҡ ваҡытта клубтың төп миссияларының береһе - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, уларҙың ғаиләләренә, һәләк булған яугирҙарҙың туғандарына һәм яҡындарына ярҙам итеү".

Шайморатов генерал ордены кавалерҙары клубы Советы рәйесе Азат Бадранов юғары награда кавалерҙары республиканың ижтимағи-сәйәси тормошонда әүҙем ҡатнашаһына ышаныс белдерҙе. Азат Шамил улы хәбәр итеүенсә, төбәктә 149 ветеран ойошмаһы эшләй. Күптәр халыҡ менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә, ҙур йәмәғәт эше алып бара. Клуб активистары был берләшмәләрҙең эшмәкәрлеген һөҙөмтәлерәк ойоштороуға булышлыҡ итәсәк. Шайморатов генерал ордены кавалерҙары шулай уҡ республикала Махсус хәрби операция ветерандары ассоциацияһының төбәк бүлексәһен булдырыу тәҡдиме менән сығыш яһаны. Был Махсус хәрби операциянан ҡайтҡан ир-егеттәрҙе илдең һәм республиканың ижтимағи тормошона, үҫеп килгән быуынды тәрбиәләүгә йәлеп итеү мөмкинлеген бирәсәк. Башҡортостан Башлығы был башланғысты хупланы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***"Башҡортостан, алға!" тигән саҡырыу һөҙөмтәләр килтерә, республикабыҙҙа һәр өлкәлә барлыҡҡа килгән матур үҙгәрештәр, ҡаҙаныштар, яңылыҡтар ҡыуандыра. Улар хаҡында ни әйтерһегеҙ?***

***Илгиз КИНЙӘБУЛАТОВ, аспирант, кесе ғилми хеҙмәткәр:*** Ошо көндәрҙә "Технопром - 2024" XI Халыҡ-ара технологик үҫеш форумы сиктәрендә Евразия ғилми-белем биреү үҙәге ғалимдары үҙҙәренең ҡайһы бер алдынғы фәнни ҡаҙаныштары өлгөләрен күрһәтте. Ошо өлгөләргә ҡарап та һуңғы йылдарҙа фән, мәғариф, башҡа өлкәләрҙә өлгәшелгән ҡаҙаныштар тураһында фекер йөрөтөп була торғандыр. Мәҫәлән, Өфө фән һәм технологиялар университетының "Киләсәк моторҙары" алдынғы инженер мәктәбенең йәш ғалимдары бөгөнгә көн ҙур һорау менән файҙаланыусы пилотһыҙ осоу аппараттары өсөн магнит үткәргесле контактһыҙ электр двигателе уйлап сығарған. Был осоу аппараттары өсөн тулыһынса янынан ижад ителгән тәүге Рәсәй двигателе. Ул осош һынауҙарын уңышлы үтеп, донъя өлгөләре алдында ҿҙенең ышаныслылығын раҫланы.

Ә бына Башҡорт дәүләт медицина университеты биомедицина продукттары һәм инновацион импланттар, аҙыҡ-түлек өҫтәмәләре һәм БАД-тарҙың яңы өлгөләре менән таныштыра. Өфө дәүләт нефть техник университеты командаһы нефть һәм газ химияһы буйынса инновацион эшләнмәләре өлгөләрен күрһәтте. Һәм, ғәмүмән, ӨДНТУ эре федераль үҫеш программаларында йыш ҡатнаша һәм был индустриаль хеҙмәттәштәр өсөн юғары технологиялы проекттарҙы бойомға ашырыра мөмкинлек бирә. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге күргәҙмәгә катализаторҙар һәм яңы быуын каучук өлгөләре менән килгән. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының да етди һәм мөһим проекттары бар, улар биотехнология, нанотехнология, генетика, йүнәлештәрен үҙ эсенә ала.

Әйткәндәй, Евразия фән һәм белем биреү үҙәге Омск, Иркутск өлкәләренең идарасы компаниялары менән өс килешеү төҙөнө. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, "Беҙҙең Евразия ғилми-белем биреү үҙәге биш йылға яҡын эшләй инде һәм ул республикала мөһим стратегик фәнни йүнәлештәрҙе билдәләүсе локомотив рәүешендә сығыш яһай". Һәм, ысынлап та, кампустың тәүге сиратын асыуҙа ҡатнашҡан Рәсәй Президенты Владимир Путин да Евразия үҙәгенең уҡыу-белем эстәү үҙәге булып тороуҙан тыш, уның фәнни-мәғрифәтселек бурыстарын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Кампуста даими ғилми эҙләнеүҙәр, фәнни ижад мөхите тыуҙырылырға тейеш, тине ул.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

ҠЫҪҠАСА

## ҠЫЙЫҠТАҒЫ САПСАНҒА...

**Өфөлә Үҙәк баҙар янында яңы арт-объект барлыҡҡа килде. "Үҙәк" аллеяһындағы скульптура банк ҡыйығында оя ҡорған ыласын (сапсандар) ғаиләһе хөрмәтенә ҡуйылды.** Металдан эшләнгән ҡош һыны финанс учреждениеһынан - ҡалаға бүләк. Уны асыу тантанаһында Өфө мэры Ратмир Мәүлиев һәм банк вәкилдәре ҡатнашты. Композицияның бейеклеге - 3,3 метр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ыласын-сапсандар яҙ һайын Өфө ҡалаһы банкы ҡыйығына әйләнеп ҡайта. 2019 йылдан банк ҡоштарҙың тормошо тураһында тәүлек әйләнәһенә онлайн-трансляция алып бара. Быйыл уларҙың ояһында өс йомортҡа бар ине, тик бер генә ҡошсоҡ сыҡты. Уға Бүләк тип исем биргәндәр.

**✓Өфөлә һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын модернизациялау төбәк программаһы буйынса яңыртылған поликлиникалар октябрҙә асыла.** Был хаҡта Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин әйтте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, төбәк программаһы 2023 йылда башланды. Ул 6 йылға иҫәпләнгән, финанслауҙың дөйөм күләме - 8 миллиард һум. Яңыртыу эштәрҙең тулы циклын: ремонтты һәм техник йыһазландырылыуҙы үҙ уңында тота. Өфөлә дауаханаларҙы һәм поликлиникаларҙы яңы медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыу, шул иҫәптән ауыр техниканы алмаштырыу планлаштырыла. Шулай уҡ серверҙар, автоматлаштырылған эш урындары һәм заманса мебель менән йыһазландырыу планы бар. Капиталь ремонт республиканың барлыҡ балалар һәм өлкәндәр поликлиникалары өсөн әҙерләнгән берҙәм дизайн-проект буйынса үткәрелә.

**✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров урта махсус уҡыу йорттарына эшсе һөнәрҙәр буйынса студенттарҙы ҡабул итеүҙе арттырырға ҡушты.** "Шуға иғтибарҙы йүнәлткем килә: уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә урта махсус уҡыу йорттарына эшсе һөнәрҙәргә ҡабул итеүҙе арттырырға тип һөйләштек. Быны яҡшы итеп башҡарырға кәрәк", - тип билдәләне ул Башҡортостан Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаевҡа һәм республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙинға мөрәжәғәт итеп. Уҡытыусылар кәңәшмәһендә сығыш яһағанда Радий Хәбиров республиканың күп кенә производстволарҙа кадрҙарға ҡытлыҡ кисереүен әйткәйне. "Беҙҙең Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһендә 2 меңгә яҡын белгесте эшкә алырға әҙерҙәр. Уларҙы колледждарыбыҙ әҙерләргә тейеш. Нефтекама, Бәләбәй һәм Туймазы ҡалаларындағы машиналар эшләү заводтарында ла өҫтәмә эшселәргә ихтыяж бар, - тине республика етәксеһе Радий Хәбиров. - Беҙ колледждарҙа профилле һөнәрҙәргә ҡабул итеү планын 580 кешегә арттырҙыҡ. Ләкин бөгөн был һанды 2-3 меңгә еткереү зарур. Ошо мөһим мәсьәләне хәл итеүгә ижади ҡарарға кәрәк".

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үлəндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Алма

❖ Ларингиттан 1 алманың ҡабығын һыҙырып алып, 1 ҡалаҡ етен орлоғо, 2 балғалаҡ бал ҡушып, 1,5 стакан һыу ҡойорға һәм ауыҙын ябып 10 минут ҡайнатырға. Утын һүнереп һөҙөргә. Йылы көйө көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 10 минут алда эсергә.

❖ Тамаҡ ҡарлыҡҡанда, йүтәлләгәндә, колит, быуындар һыҙлағанда 1 алманы ваҡлап турарға һәм 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 сәғәт төнәтергә. Ашағандан һуң эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр стакан төнәтмә эсергә.

❖ Шәкәр диабеты, нурланыуҙан 1 ҡалаҡ ваҡланған алма япрағы һәм сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Төнгөләккә 2 алма ашап ятырға.

❖ Склероздан көн һайын 300 грамм алма ашау файҙалы.

❖ Арығанда, йонсоғанда 1 стакан алма һуты эсергә.

❖ Энтероколит булғанда көн һайын 300 грамм яңы ҡырылған алма ашарға. Энтероколит сәбәпле эс киткәндә ярҙам итә.

❖ Баш ауырығанда тасҡа бер тигеҙ нисбәттә ҡайнар һыу һәм алма һеркәһе ҡойорға, шунан күтәрелгән быуҙы һуларға.

❖ Табандағы бәшмәк йәки микоздан көн һайын табандарға алма һеркәһе һөртөргә. Кипкәс, тағы бер ҡабат һөртөргә.

❖ Мускулдар тартылғанда шешмәкләнеп торған урынға һыу ҡатнаштырылмаған алма һеркәһенә мансылған бәйләмес һалырға. 5 минут торорға. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ҡабаттан эшләргә. Шулай уҡ 0,5 литр алма һеркәһен йылытып, шуға 2 балғалаҡ тоҙ һәм 4 тамсы йод ҡушырға һәм ҡатышманы һыуытырға. Һыуыҡ әҙерләмәгә марля салфетканың сылатып, шешмәкләнгән урынға ябырға һәм өҫтөнән боҙ һалып, полиэтилен менән ҡаплап, таҫтамал менән урап ҡуйырға. 10 минут ҡыбырламай ятырға. Шунан бәйләместе сисергә, ауыртҡан урынды ҡоротоп һөртергә һәм тығыҙ итеп бәйләп ҡуйырға.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Дөрөҫлөктө яҙыу ҡайсаҡ еңелдән түгел, ә бәғзе осраҡта хатта хәүефле булыу ихтималлығын белдем. Яҙғаныңдың кемгәләр оҡшау-оҡшамыуы бар шул.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



## КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Аҡ торна**
**(Стерх)**



Һоро торнаға оҡшаған, әммә уға ҡарағанда кәүҙәгә ҙурыраҡ. Төп билдәһе - аҡ төҫө. Суҡышы, унын тирәләй яланғас тиреһе, тәпәйҙәре ҡыҙыл. Йәш ҡош түгге көҙҙә ерәнерәк, 2 йәшкә оло ҡоштоң төҫөнә инә. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 120-140 см. Тауышы һоро торнаныҡы кеүек, тик сыңрауы моңлораҡ, йомшағыраҡ.

Рәсәйҙә генә оя ҡора. Яҡутстандың төньяҡ-көнсығышында һәм Төньяҡ Себер һаҙлыҡтарында оя ҡороусы ике популяция билдәле. Шулай уҡ айырым-айырым пар булып йәшәүсе аҡ торналар тағы ла бер нисә урында йәшәүе асыҡланған. Башҡортостанда һирәк ҡош. XVIII-XIX быуаттарҙа аҡ торналар Өфө тирәһендә һәм 1924 йылдың көҙөндә Талҡаста күренгән. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында Шайтантауҙа ла уларҙы күреүселәр булған. 1986 йылдың 24 апрелендә Кушнаренко районының Буткан күлендә бер нисә пар аҡ торна осраған. 2004 йылдың көҙөндә Ҡыйғы районының Теплый Ключ ауылы халҡы яраланған аҡ торнаға осрай, һуңынан ул күп йылдар Башҡорт дәүләт университетының зоология музейында йәшәне. Аҙаҡтан уны Рязань өлкәһендә урынлашҡан Ока ҡурсаулығына оҙаттыҡ, уны унда ҡабаттан тәбиғәт шарттарында йәшәргә күнектереп, аҙаҡтан иреккә сығарырға тейештәр ине. Был осраҡтар барыһы ла Башҡортостанда ла һирәк булһа ла аҡ торна осратыу мөмкинлеге барлығы хаҡында һөйләй.

Аҡ торна күле булған һаҙлыҡтарҙы ярата. Бер оя ҡорған ерен ә йыл һайын әйләнеп ҡайта, бары тик ояларҙы ғына алыштырып тора. 2, һирәгерәк 1 йомортҡа һала. Уны инә ҡош баҫып сығара. Йәш ҡоштар 6-7 йәштә үҙе бала сығара башлай. Туҡланыу һоро торнаныҡы кеүек.

Иҫәбе яғынан аҙ булғас, көҙөн был ҡоштар бер тупҡа тупланмай, ә ғаиләһе менән оса. Миграция юлдары Обь, Иртыш, Тобол үҙәндәре буйлап һалынған. Аҡ торналарҙың бер өлөшө Каспий диңгеҙенең Иранға ҡараған өлөшөндә ҡышлай. Бер өлөшө Ҡаҙағстан һәм Үҙәк Азия аша Һиндостанға оса.

Аҡ торна беҙҙең илдә һирәк осраған ҡош. Ул барлыҡ Ҡыҙыл Китаптарға ла индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КЕМГӘ ЙӘШӘҮ ЕҢЕЛЕРӘК?



**Республика гәзит-журналдарының береһендә бәләкәй генә бер хикәйәт күреп ҡалғайным. Көндәр буйы ҡағыҙ-мағыҙ аҡтарып, яҙыу-һыҙыу эше менән булышып ултырған бер "кәнсәләр" хеҙмәткәренең урам аша торған император һарайына ҡарап, батша тормошона күҙе ҡыҙыуы, "Их, уға рәхәт, ни теләһә, шуны эшләй, көнө буйы тынсыу бүлмәлә бикләнеп тә ултырмай", тигән һымағыраҡ итеп падишаһҡа көнләшеүе хаҡында бәйән ителә унда. Ә һәр саҡ "йылыла ултырып ҡына эшләгән" был чиновниктың кәсебенә урам майҙанында физик эш менән булышҡан икенсе бер кешенең "эсе көтөрләй". Батша ғали йәнәптәренең иһә... тәҙрә аша ҡарап, ил күләмендәге бер ниндәй ҙә ҡатмарлы мәсьәләләр, сәйәсәт тураһында баш ҡатырмай, тыштағы саф һауала "рәхәтләнеп ҡар көрәүсе" шул эшсегә көнсөллөгө килә, имеш.**

Үҙебеҙҙең тормош ысынбарлығын сағылдырған хәҡиҡәт асып һалынған был хикәйәттә. Билдәле урыҫ яҙыусыһы Николай Некрасов ун туғыҙынсы быуат урталарында яҙған поэманы иҫләйек. "Кому на Руси жить хорошо" тип аталған был әҫәрҙә лә "мужик"тар поптан алып батшаға ҡәҙәр булған төрлө юғары ҡатлам кешеләренә еңел йәшәләүе хаҡында бәхәсләшә.

Бала сағымда "Ҙур кешегә рәхәт, ни эшләһә лә уны тыйыусы юҡ. Их, ҡасан үҫеп етәм инде", тип хыялланыуым иҫемдә. Бәғзе бер оло кешеләр ҙә тормошта әле бер ни ҙә төшөнөп етмәгән шул сабый баланың аң даирәһенә тартым фекер йөрөтә. Бер аҙ тәрәнерәккә төшөп, төптәнерәк уйлана башлаһаң, ябай эшсе, крәҫтиәндең генә түгел, түрә-ғараның да үҙенә хас донъя ауырлығы була икән. Элегерәк кемдер тураһында "Ул ғүмер буйы еңел эштә генә йөрөнө, колхоз берсиҙәтеле булды", тигән һымағыраҡ хәбәрҙәрҙе ишеткеләй торғайным. Үҙҙәре көрәк-һәнәк тотоп көн күргән ағайҙарға түрәләрҙән дә еңелерәк йәшәгәндәр юҡ һымаҡ тойолғандыр инде. УАЗдарҙа ғына елдереп йөрөгән председателдең эш асылын, уның күп үҙенсәлектәрен белмәгән өсөн дә ҡайһы берәү шундайыраҡ һүҙ йөрөткәндер.

Шул "еңел йәшәүселәрҙең" шөғөлөнә күҙ һалайыҡ әле. Колхоз эше гел генә ал да гөл барһа - һүҙ юҡ, әлбиттә. Тик хужалыҡты шулай алып барыу өсөн әлеге председатель көнө-төнө тигәндәй ҡырҙан ҡайтып инмәгәнен беләбеҙме? Бынан тыш, әйтәйек, бихисап сәбәптәр арҡаһында, колхозға төшөрөлгән план үтәлмәй ҡалды икән, ти. Уның өсөн тап ана шул әлеге етәксенең район башлыҡтары алдында яңғыҙы, ҡайсаҡ хатта "башы менән" яуап биреүе хаҡында белеү ҙә кәрәктер. Айырыуса, утыҙынсы йылдарҙа "халыҡ дошманы" тип ғәйепләнеп, башы киткән шундай күп кенә түрә кешеләргә лә һис еңел булмағандыр. НКВД хеҙмәткәрҙәре ҡулына бығау һалған мәлдә әлеге колхоз председателенең, моғайын, ябай эшселәр сафында салғы тотоп, бесән сабып, көрәк менән ер ҡаҙып ҡына йөрөгөһө лә килгәндер. Бөгөнгө көндәрҙә лә, ниндәй генә уңған булыуына ҡарамаҫтан, етәксенең хәле тәбиғәттең, көн торошонон нисек булыуына ҡарай. Бынан тыш, үҙенең ҡул аҫтындағы кешеләрҙең һәммәһенә ярап, уларҙың көнкүрешен хәстәрләп, башҡа төрлө ихтыяждарын үтәп торорға ла өлгөрөргә тейеш бит әле хужа кеше.

...Һәр кемдең үҙ күлдәге үҙенә яҡыныраҡ тигәндәй, ниндәй эш еңелерәк, тигән һорауға яуап бирә башлаһам, ҡасандыр үҙем йөрөгән оҙайлы хәрби хеҙмәтем иҫкә төшә. Табип та булараҡ, әҙәм һаулығына бәйле ана шул кәсеп тураһында йыш ҡына фәлсәфәләп алырға яратам. Күп кенә шәфҡәт туташтарының табип эше еп-еңел генә тип һанауын һиҙә торғайным. Ул ғына ла түгел, госпиталдә медсестра булып хеҙмәт иткән бәғзе бер ҡыйыуыраҡ урыҫ ҡыҙҙарының: "А че вам, докторам, кучу назначений начеркал в истории болезни, и дело с концом. А мы - лечим!" - тигән һымағыраҡ ярым шаяртып әңдәшеүҙәрен дә ишеткеләгәнем булды. "Ауырыуға фәлән уколды эшлә, төгән дарыуҙы бир..." тип кенә бойороп йөрөгән врачтың эшенең ниндәй ҡыйынлығы булһын инде, тигән иныныуҙа булғандар юҡ түгел шул. Әммә пациенты һауығып, дауахананан сығып киткәнгә ҡәҙәр уның өсөн көнө-төнө борсолған табип үҙ хәлен үҙе генә белә инде, был хаҡта бер ҡасан да башҡаларға "ҡысҡырып" йөрөмәй. Выжданы алдында, закон буйынса ла кеше ғүмере өсөн һәр саҡ яуаплы булған шундай коллегаларым араһында утыҙ-ҡырҡта сәстәре ағарып, йәшләй генә инфаркт йә инсульт кисергәндәр бихисап. Айырыуса хирургия вәкилдәре. Кемгәләр операция яһалғас, әйтәйек, операция сестраһы тыныс ҡына өйөнә ҡайтып китә. Ә хирург әлеге сирлеһе хаҡында уйланыуҙан бер ҡасан да бушанмай. Ял көндәре лә килеп, ауырыуҙарының хәлен белешә ул. Шулай уҡ табип үҙ эшендә һәр төрлө ҡайғылы хәлдәрҙән дә гарантияланмаған, пациенттың үлем осраҡтары ла булыу, уның өсөн прокурор иптәштәр алдында яуап тотоу ихтималлығы бар. Мин етәкләгән бүлекте ундай бәлә-ҡаза ситләтеп үтте, әлхәмдүлилләһ. Әммә бәғзе пациентым бик ауыр хәлдә булған мәлдәр хәтеремдә. Ана шул саҡтарҙа, ысынлап та, әлеге медсестраларыма көнләшә инем.

...Отставкалағы хәрби кеше булараҡ, кесе лейтенанттан алып, юғары дәрәжәгә тиклемге офицерҙарҙың һәм, әлбиттә, ябай һалдаттың хеҙмәтенең, һис һүҙһеҙ, ауыр булыуы хаҡында ла өндәшмәй ҡалып булмаҫ. Айырыуса бөгөнгө көндә. Ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, фронттың алғы һыҙығында оборона тотоп ятҡан ир-аттарыбыҙ иңенә төшкән ауырлыҡтың еңелдән түгел икәнен аңлау кәрәк. Бәғзе берәүгә "бойороуҙан башҡаны белмәгән" офицерҙарҙың тормошо ифрат еңел һымаҡ булып тойолоуы ла бар. Әммә мин бының менән һис кенә лә килешмәҫ инем. Һәр бер командирҙың өҫтөнән мотлаҡ тағы ла командир була. Үҙенә бирелгән әмергә "Есть!" тип кенә яуаплап, уны һүҙһеҙ үтәргә бурыслы улар. Хәрбиҙәрҙең бойороҡто үтәү-үтәмәү хаҡында бәхәсләшергә хоҡуғы булмауы ғына үҙе ни тора! Бына шундай тормошто улар үҙҙәре һайлап алған бит инде.

Ә ябай һалдатҡа килгәндә, уларҙың ауыр хеҙмәтен күреп, гел генә йәлләй торғайным. Башҡа күп кенә өлкән офицерҙарҙың уларға "сынок" тип, атайҙарса мөнәсәбәт ҡылыуын да күрә инем. "Атайҙарса" тигәс тә, әлбиттә, бында "йыуаш атай" күҙ уңында тотолмағанын һәр кем аңлайҙыр. Хәрби хеҙмәттең "бал да май" түгеллеген үҙе шул "һурпаны татыған" һәр һалдат һәм офицер белә инде. Хеҙмәт иткән дәүерем дә йәш егеттәребеҙҙе үҙемдең балаларым һымаҡ күреп, йыш ҡына казармаларына барып, башҡаларҙан (өлкән һалдаттарҙың баш-баштаҡлығынан) яҡлашҡаным хаҡында һис кенә лә тартынмай әйтә алам. Яҡташ һалдаттарҙы өйөмә ҡунаҡҡа ла алып ҡайтҡылай торғайным. Ғәйәт ауыр бурыс йөкмәтелгән шул уландарыбыҙ хаҡында ла йыш ҡына яҙғылайым.

..."Яҙғылайым" тигәндән, матбуғат эшсәндәренең кәсебе, тағы бер нисә төр һөнәр тураһында һүҙ әйтмәһәм, ғәҙел булмаҫ. Һуңыраҡ ҡына булһа ла, үҙем ҡәләм тирбәтә башлағас, гәзит-журнал биттәренә һәр төрлө мәғлүмәттәр яҙып сығарыусыларҙың - журналистар эшенең нескәлектәренә төшенә башланым. Дөрөҫлөктө яҙыу ҡайсаҡ еңелдән түгел, ә бәғзе осраҡта хатта хәүефле булыу ихтималлығын белдем. Яҙғаныңдың кемгәләр оҡшау-оҡшамыуы бар шул. Берәүҙең ҡаҙанышын маҡтап яҙыу күңеленә хуш килә икән, икенсе тәңкитләүе ифрат та ауыр. "Тура әйткән - туғанына ярамаҫ" тигәндәр бит.

**(Дауамы 11-се биттә).**

Мәғариф

6-12 сентябрь (нарысай) 2024 йыл №35 (1128)

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҢЫЛЫҠТАР ЯҠШЫҒА БУЛҺЫН!



**Башҡортостан уҡыусыларын һәм уларҙың ата-әсәләрен яңы уҡыу йылында белем усаҡтарында ниндәй үҙгәрештәр көтә икән? Шулар тураһында тағы бер ҡабатлап үтәйек:**




***Яңы предметтар.*** Сентябрҙә мәктәп расписаниеһында үҙгәрештәр буласаҡ. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың Мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлетбирҙин әйтеүенсә, яңы уҡыу йылында программала ике яңы предмет барлыҡҡа килде: "Хәүефһеҙлек нигеҙҙәре һәм Ватанды һаҡлау" һәм "Хеҙмәт (технология)". Был фәндәр әле лә бар, әммә улар буйынса уҡыу программаһында үҙгәрештәр индереләсәк. Был предметтарҙы уҡытыу өсөн йәйгеһен меңдән ашыу уҡытыусы әҙерләнгән. Күҙән улар өсөн "Патриот" паркында өс көнлөк күнекмә үткәреләсәк.

***Контроль эш аҙыраҡ буласаҡ.*** 1 сентябрҙән мәктәптәрҙә контроль эштәре, бөтә Рәсәй тикшереү эштәренән тыш, уҡыу ваҡытының 10 процентынан артмаҫҡа тейеш. Юғиһә, был ҡағыҙа боҙоу тип иҫәпләнәсәк. Был хаҡта Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Рособрнадзор башлығы Анзор Музаев белдерҙе. Ул шулай уҡ, бөтә контроль эштәр Рособрнадзор менән килешеп эшләнергә тейеш, тип өҫтәне. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ҡайһы бер мәктәптәрҙә уҡыу предметтары буйынса контроль эштәре уҡыу ваҡытының 35-40 процентын биләй.

***Пилотһыҙ осоу аппараттары профиле буйынса әҙерлек үҙгәге.*** 2024 йылда Башҡортостан "Пилотһыҙ авиация системалары" профиле буйынса практик әҙерлек үҙәктәре булдырыласаҡ пилот төбәктәр иҫәбенә инде. Яңы уҡыу йылы башынан уҡ бындай үҙәк Өфө радиоэлектроника, телекоммуникациялар һәм хәүефһеҙлек колледжында, шулай уҡ 20 мәктәп базаһында 20 махсуслаштырылған класта (түңәрәк) эшләй башлай.

Бөтәһе 500-ҙән ашыу уҡыусыны йәлеп итеү планлаштырыла. Бынан тыш, проект сиктәрендә педагогик хеҙмәткәрҙәр уҡытыласаҡ, белем биреү программалары әҙерләнәсәк һәм тормошҡа ашырыласаҡ, уларға цифрлы белем биреү контентын файҙаланып, пилотһыҙ авиация системаларын проектлау, эшләү, етештереү һәм файҙаланыу күнекмәләренә өйрәтеү буйынса модулдәр индереләсәк.

***Мәктәптәрҙе яңыртыу.*** Биш йыл эсендә Башҡортостанда 22 меңдән ашыу урынға иҫәпләнгән 44 мәктәп сафҡа индерелде. Берләштерелгән объекттарҙы иҫәпкә алып, 9173 урынлыҡ 65 балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылды. Быйыл тағы өс мәктәп - Өфөләге "Йондоҙ" белем биреү үҙәге, Иглин районының Иглин ауылында 1225 урынлыҡ мәктәп һәм Туймазыла 500 урынлыҡ 5-се урта мәктәп сафҡа индереләсәк. Концессия килешеүҙәре сиктәрендә республикала ете ҙур мәктәп төҙөлә. Президент программаһы ярҙамында ике йылда Башҡортостанда 53 мең бала өсөн 140 мәктәп бинаһы капиталь ремонтланды. Был маҡсатҡа федераль бюджеттан 6,5 миллиард һум йүнәлтелде, тағы ла 1 миллиард һумдан ашыуын республика өҫтәне.

Быйыл республикала 31 мәктәптә ремонт башланды, уларҙың бишәүһе 1 сентябрҙә уҡ ишектәрен аса. Бынан тыш, ике йыллыҡ цикл сиктәрендә 25 мәктәп киләһе уҡыу йылына капиталь ремонтланасаҡ. Был йүнәлештә эш дауам итәсәк.

***Бушлай йөрөү.*** 1 сентябрҙән Башҡортостанда күп балалы ғаиләләрҙәге уҡыусылар өсөн ҡала йәмәғәт транспортында: автобустарҙа, трамвайҙарҙа, троллейбустарҙа бушлай йөрөү тураһында закон көсөнә инә.

Бындай ярҙам сараһы күп балалы ғаиләләрҙәге бөтә уҡыусыларға ла ҡағыла, мохтажлыҡ критерийы юҡ. Ул уҡыу көндәрендә 1 сентябрҙән 31 майға тиклем ғәмәлдә буласаҡ, ял, байрам һәм каникулдарҙан тыш - йылына ни бары 192 көн. Был социаль ярҙам сараһы менән күп балалы ғаиләләр, өлкән балаға 18 йәш йәки 23 йәш тулғансы, көндөҙгө формала уҡыған осраҡта файҙалана ала. Башҡортостанда өс һәм унан күберәк балаһы булған, шул иҫәптән уллыҡҡа алынған һәм опекаға йәки попечителлеккә ҡабул ителгән, статусы мөҙҙәтһеҙ билдәләнгән ғаилә күп балалы ғаилә тип иҫәпләнә.

***Дәрестәрҙә смартфондарҙы тыйыу.*** Тағы ла бер мөһим яңылыҡ - республика мәктәптәрендә яңы уҡыу йылынан алып дәрестәрҙә кеҫә телефондарын ҡулланыу тыйыла. Мәғариф тураһындағы республика законына тейешле үҙгәрештәр индерелде.

Законға ярашлы, уҡыусы "башланғыс дөйөм, төп дөйөм һәм урта дөйөм белем биреү программаларын үҙләштереүҙә уҡыу дәрестәрен үткәргәндә уҡыусыларҙың, белем биреү эшмәкәрлеген алып барған ойошма хеҙмәткәрҙәренең ғүмеренә йәки һаулығына хәүеф янаған осраҡтарҙан, башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән тыш, кеҫәмә радиотелефон ҡулланмаҫҡа тейеш". Элек уҡытыусылар ҡайһы берҙә дәрес ваҡытында уҡыусыларҙың телефондарын мәжбүри йыя ине, был конфликттарға килтерә. Хәҙер иһә закон мәктәптәргә сикләүҙәр индереү өсөн хоҡуҡи нигеҙ бирә.

***Уҡытыусыларҙың хоҡуғын яҡлау һәм мыҫҡыл иткәне өсөн яза.*** Яңы уҡыу йылында уҡытыусылар, ниһайәт, ҡануни кимәлдә уҡыусыларҙың ҡыйыу һөжүменән һаҡлана һәм хатта кәрәк саҡта уларға яза бирә ала. Былтыр декабрҙә федераль кимәлдәге "Мәғариф тураһында" законға ошондай пункт өҫтәлде. Һуңғараҡ педагог статусы һәм мәғариф тураһындағы законға төбәк кимәлендә төҙәтмәләр индерелде.

Закон кимәлендә уҡытыусыларҙың кешелек дәрәжәһен хөрмәт итеү, физик һәм психологик көс ҡулланыуҙың, шәхесте мыҫҡыллауҙың бөтә формаларынан яҡлау хоҡуғы барлыҡҡа киләсәк. Быға тиклем бындай хоҡуҡ тик уҡыусыларҙа ғына ине.

Хәҙер, әгәр уҡыусы уҡытыусының хоҡуғын боҙһа, кәмһетһә, һуҡһа, ул белем биреү ойошмаһы етәкселегенә ялыу бирергә һәм дисциплинар яза талап итергә тулы хоҡуҡлы. Әгәр элек етәксе ялыуға күҙ йомһа, хәҙер ул уны мотлаҡ ҡарарға тейеш.

***Педагогтар тураһында хәстәрлек.*** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылдан алып уҡытыусыларға берлектә финанслау шарттарында республиканың шифахана-курорт учреждениеларына ике аҙналыҡ юлламалар бүлергә тәҡдим итте. Республика етәксеһе профилле министрлыҡтарға был мәсьәләне тикшерергә һәм бер ай эсендә тәҡдимдәр индерергә ҡушты. Радий Хәбировтың был тәҡдиме Стәрлетамаҡта Мәғариф буйынса традицион республика август кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар өсөн көтөлмәгән һәм күңелле сюрприздарҙың береһе булды. "Был бюджетҡа ярайһы уҡ ҙур йөкләмә, шуға күрә мин бик һаҡ ҡына әйттем. Беҙ аҡсаны һанай башлайбыҙ, әммә ниндәйҙер вариант, унда ситтән дә, уҡытыусынан да финанслауҙың ҙур өлөшө булырға тейеш. Йыл һайын күпме эшләй аласағыбыҙҙы ҡарап сығайыҡ. Һынап ҡарайыҡ, үҙ ваҡытында был практика булған. Уҡытыусылар өсөн яҡшы нәмәләр эшләргә тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

***Махсус мәктәп менюһы.*** 1 сентябрҙән Башҡортостанда уҡыусылар өсөн махсус база менюларының биш варианты ойошторола. Улар үҙ эсенә диабет менән ауырығандар, төрлө аҙыҡ аллергияһы, фенилкетонурия менән яфаланған балалар өсөн меню варианттарын, шулай уҡ махсус глютенһыҙ һәм һөтһөҙ менюҙы ала. Сентябрҙән рационға балалар яратҡан ауылса картуф, тауыҡ итенән "Наггетсы", һыйыр итенән "Баяр", "Люля-кебаб" кәтлиттәре, сырниктар, йәшелсәнән солянка, фасоль аштары индерелә.

Төп туҡланыуға өҫтәп, 2 сентябрҙән уҡыусыларға "Экоснектар" - сублимацияланған (консервалауҙың яңы йүнәлеше) емеш-еләк тәҡдим ителәсәк. Төбәк Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылда уҡыусыларҙың льготалы категорияларын бушлай ҡайнар аш менән тәьмин итеүҙе ойоштороу өсөн бөтәһе 3,7 миллиард һум бүленгән, шул иҫәптән федераль бюджеттан - 2,2 миллиард һум, республика бюджетынан - 1,5 миллиард һум.

***Яңы автобустар.*** Һуңғы алты йылда республика бюджеты иҫәбенә 714 миллион һумлыҡ 253, федераль бюджет иҫәбенә 950 миллион һумлыҡ 447 яңы мәктәп автобусы һатып алынды.

Йыл аҙағына тиклем Рәсәй Хөкүмәте бойороғо буйынса республикаға тағы 50 яңы мәктәп автобусы килә. Уларҙың ағымдағы йылдың өсөнсө кварталында килеүе көтөлә, тип хәбәр итте Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Мәғариф министрлығы етәксеһе Илдар Мәүлетбирҙин. Республикала мәктәп автопаркын әүҙем яңыртыу дауам итә, тип өҫтәне министр. Мәҫәлән, 2024 йылда республика бюджеты иҫәбенә министрлыҡ 107,4 миллион һумға 17 мәктәп автобусы һатып алған. Уның һүҙҙәренсә, яңы уҡыу йылында уҡыусыларҙы ташыуға 1523 мәктәп автобусы йәлеп ителәсәк.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА**
**әҙерләне.**

БЫЛ - ЫСЫНБАРЛЫҠ

**Яҙғыса аяҙ һәм йылы булып, 2 сентябрь тыуҙы. Хатта көҙ айына аяҡ баҫҡаныбыҙ тойолмай ҙа кеүек. Һупайлы биҫтәһенең М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы майҙаны аллы-гөллө сәскә гөлләмәләре тотҡан уҡыусылар һәм ата-әсәләр менән тулған, барыһының да йөҙҙәре яҡтырып торғандай. Репродукторҙан ошо уҡыу йортон тамамлаған Алмас Шаммасов һәм Айгөл Мусина башҡарыуында лицей гимны яңғырай:**

**Яҙ кеүек, күңелдә йылы саҡ,**
**Барыһы йылмая бик алсаҡ.**
**Ҡояштай иркәләй бала саҡ,**
**Хәтерҙә мәктәбем ҡаласаҡ.**
**Мәктәбем донъяһы аң-белем,**
**Өйрәнәм башҡортса - үҙ телем.**
**Мин ғорур - Уралым үҙ илем,**
**Аҡылым алтындай саф ғилем...**

**Эйе, тап ошо көндә барса Рәсәй мәктәптәре яңы - 2024/2025 уҡыу йылына аяҡ баҫты. Һис һүҙһеҙ, ата-әсәләр, уҡыусылар, уҡытыусылар, мәғариф хеҙмәткәрҙәре уның уңышлы буласағына ихлас ышана.**

2019 йылда уҡ үҙенең БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға мөрәжәғәтендә. Әйтергә кәрәк, ошондай дәүләт сәйәсәте республикала намыҫ менән үтәлә бара. Бөгөнгә Башҡортостан - мәктәп биналарын ремонтлау буйынса Рәсәй лидерҙарының береһе. Быға бер нисә күрһәткес:

2019 - 2023 йылдарҙа барлығы 777 мәктәп бинаһына капиталь ремонт эшләнә: утын мейестәре урынына электр менән йылытыу системаһы монтажлана, туҡланыу блоктары, спортзалдар яңыртыла, йылытылған туалеттар ҡуйыла, реконструкция эшләгәндә биналарҙың майҙаны ҙурайтылыуы һөҙөмтәһендә өҫтәмә уҡыу урындары булдырыла, ә был ҙең, һөнәри уҡыу йорттарының матди-техник базаһын яңыртыу менән бер рәттән, педагогтарҙы һәм уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырыу, уларҙың ижади мотивацияһын күтәрмәләү системаһы булдырыла, илебеҙҙәге иң алдынғы уҡытыу практикаларын өйрәнеү һәм ҡулланыу бойомға ашырыла.

***Әлеге осорҙа мәғарифты үҫтереүҙең төп йүнәлештәренең береһе - белем биреү процесын цифрлаштырыуға өлгәшеү, ә бының өсөн һәр бер мәктәптә, башланғыс кластарҙан башлап, цифрлы технологиялар ҡулланыуҙы ғәмәлгә индереү фарыҙ.*** Шуға күрә мәктәптәрҙе компьютерлаштырыу, интернет селфарыҙ: әлеге көндә был проблема тейешле кимәлдә хәл ителеп бөтмәгән, сөнки цифрлы технологияларҙы юғары кимәлдә үҙләштергән белгестәр мәктәп уҡытыусыһының эш хаҡына риза түгел, улар башҡа ойошма һәм предприятиеларҙа 3-4 тапҡырға ҙурыраҡ килем алыу мөмкинлегенә эйә.

***Өҫтә әйтелгәндәргә ҡарамаҫтан, республика мәктәптәрен заманса белем алған педагогик кадрҙар менән тәьмин итеүгә дәүләт иғтибары кәмемәй.*** Эш шарттарының уңайлы булыуынан башҡа, уҡытыусы, тәрбиәсе матди яҡтан да яҡлаулы булһын ине. Ауыл мәктәптәренең ҡайһы бер предмет уҡытыусыларына

# БАШҠОРТОСТАН МӘҒАРИФЫ УҢЫШТАРЫ




Беҙ - XXI быуат кешеләребеҙ. Хатта фән һәм сәнәғәт йылдам үҫешкән XX быуатта ла хәҙерге заманыбыҙҙың фундаменталь фәндәре һәм ғилми ғәмәлиәт ҡаҙаныштары төшөбөҙгә лә инеп сыҡманы. Быны раҫлар өсөн дәлилдәр етерлек: цифрлы технологиялар үҙҙәре генә лә бар донъя алтынынан ҡиммәтерәк баһалана хәҙер. Фән дә, технологиялар ҙа, шуға ярашлы үҫешә барған сәнәғәт тә кеше аҡылы һәм кеше ҡулдары тарафынан хасил ителә. Фани донъяға килгән бер генә баланың да тыумыштан һәләттәр йә иһә талант эйәһе булмағаны ла күптән билдәле. Шуға күрә лә, донъяның барса илдәрендә үҫеп килеүсе йәш быуындарға белем һәм интеллектуаль тәрбиә биреү системаһын камиллаштырыу дәүләт кимәлендәге өҫтөнлөклө мәсьәлә итеп ҡарала.

Әйтергә кәрәк, совет осоронда ла, унан һуң да Советтар Союзында һәм Рәсәйҙә мәғариф системаһы дәүләт органдары иғтибары үҙәгендә булды, һуғыштар, сәйәси һәм иҡтисади катаклизмдар ҙур илебеҙҙе ҡаҡшатҡан мәлдәрҙә лә мәктәптәр ябылманы, уҡытыу-тәрбиә эшен алға әйҙәүсе психология, педагогика, дидактика фәндәре өлкәһендә һәм дөйөм белем биреү ғәмәлиәтендә өлгәшелгән байтаҡ ҡына асыш-ҡаҙаныштарыбыҙға сит ил ғалимдары юғары баһа бирә ине.

Эйе, беҙҙең олоғая барған быуындарыбыҙ йәшәгән осорҙа ла хәл ителмәгән ҡатмарлы сәйәси һәм иҡтисади, идеологик һәм рухи проблемалар етерлек булды. Әммә, бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, илебеҙҙең һәм, әлбиттә, Башҡортостаныбыҙҙың мәғариф системаһы үҫешә бара, быны бер кем дә инҡар итә алмай. Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың шәхси башланғысында һәм даими иғтибары үҙәгендә булған мәғариф системаһы иң ауыр йылдарҙа ла ташландыҡ хәлдә ҡалманы, меңдән ашыу яңы һәм яңыртылған мәктәп биналары, һөнәри белем биреүҙе камиллаштыра барыу, уҡыу йорттарын заманса уҡытыу йыһаздары менән тәьмин итеү ошоға дәлилдер.

Әйтергә кәрәк, 2010 - 2018 йылдарҙа ҡуҙәтелгән торғонлоҡ һәм мәктәп проблемаларына вайымһыҙ ҡарау хәҙер артта ҡалды, М.Ғ. Рәхимов заманындағы иң мөһим традициялар - уҡытыу-тәрбиә эшенең матди базаһын яңыртыу, уҡытыусы-тәрбиәселәргә даими дәүләт иғтибарын һәм ярҙамын арттырыу, балаларҙың һәләттәрен заманса технологиялар ярҙамында үҫтереү иң көнүҙәк проблемаға әүерелде. Бында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың һәм, ғөмүмән, республика етәкселегенең, муниципаль властарҙың ошо өлкәне даими контролдә тотоп, уларҙың мәғарифтағы өр-яңы башланғыстарҙы ғәмәлгә ашырыу менән туранан-тура идара итеүе һөҙөмтәһендә республикабыҙҙың байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәшеүен билдәләп үтмәйенсә булмай.

***Республика етәкселеге иң элгәре уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн комфортлы белем биреү арауығын булдырыуҙы өҫтөнлөклө бурыс итеп ҡарай.*** "Беҙҙең өсөн мәғариф - айырым хәстәрлек итеү өлкәһе. Балаларыбыҙға һәр бер мәктәптә - ул төпкөлдәге ауылдамы, йә иһә ҡалаларҙың яңы төҙөлгән биҫтәләрендәме - сифатлы белем һәм тәрбиә биреү өсөн барса шарттарҙы булдырыу мөһим", - тип белдергәйне Радий Хәбиров бер сменалы уҡытыу режимына күсеү мөмкинлеген бирә.

Республика етәкселегенең ошо йүнәлештәге әүҙемлегенә яуап итеп, Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанда мәктәп биналарын тулыһынса яңыртыу маҡсатында федераль бюджеттан бүленгән аҡса иҫәбенә бермә-бер арттыра барҙы, был күрһәткес буйынса беҙ Рәсәй Федерацияһында өсөнсө урындабыҙ. Һөҙөмтәлә капиталь ремонт эшләнгән мәктәп биналары һаны буйынса ла республикабыҙ илебеҙҙә икенсе урынға сыҡты. 2022-2023 йылдарҙа дөйөм белем биреү ойошмалары биналарына капиталь ремонт эшләү һәм уларҙы заманса йыһазландырыу буйынса федераль программаға ярашлы 37,6 мең уҡыусыға иҫәпләнгән140 мәктәп бинаһы яңыртылды. Был эштәр муниципаль райондарҙа ла бермә-бер әүҙемләштерелде, һуңғы ике йылда 29 муниципалитет ошондай эштәрҙе башҡарып сыҡты. РФ Мәғариф министрлығы планына ярашлы, 2024 йылда - 6, 2025 йылда - 8, 2026 - 35 мәктәп бинаһы ремонтланасаҡ.

Йәнә шуныһы ла бик мөһим: республикабыҙҙа мәғариф системаһын үҫтереү һәм камиллаштырыу буйынса эштәр комплекслы рәүештә ғәмәлгә ашырыла, мәктәптәрҙе тәрҙәре менән тоташтырыу, цифрлы дәреслек-ҡулланмалар, интерактив таҡталар, болот сервистары һәм башҡа шундай инновациялар менән тәьмин итеү алғы планға сыҡты. Ошондай уҡ маҡсаттар "Цифрлы белем биреү мөхите" тип аталған федераль проектта ла ҡуйылған, һәм уларҙы бойомға ашырыу Башҡортостан мәғарифында уҡыусыларға юғары сифатлы һәм һәләттәренә ярашлы белем алыу мөмкинлеген бирә. Был йүнәлештә лә һиҙелерлек алға китеш күҙәтелә: республиканың 945 мәктәбенең цифрлы белем биреү мөхитен булдырыу маҡсатында матди-техник базаһы яңыртылды, бының өсөн федераль бюджеттан 1,52 млрд һум аҡса бүленде, шул иҫәптән 2019 - 2023 йылдарҙа 650 дөйөм белем биреү учреждениеһы цифрлы йыһаз комплекттары менән тәьмин ителде; 665 "Үҫеш нөктәһе" тип аталған белем биреү үҙәктәре, балаларға цифрлы белем биреү буйынса 9 "IT-куб" үҙәге, 3 "Кванториум" балалар технопаркы асылды, 2 мобиль технопарк булдырылды. Әлбиттә, техник саралар инновациялы уҡытыу өсөн яңы мөмкинлектәр бирә, әммә был йүнәлештә лә юғары кимәлдә эшләй алған квалификациялы кадрҙарҙың етерлек булыуы ҡытлыҡ кисереүе бер кемгә лә сер түгел. Шуға күрә 2019 йылдан бирле ауыл мәктәптәренә эшкә килеүсе йәш педагогтарҙы матди дәртләндереү ғәмәлгә ашырыла. Ошо проект башланғандан бирле 525 йәш уҡытыусыға 362 млн һумлыҡ матди ярҙам күрһәтелде, ә быйыл 150 йәш педагог 690-шар меңлек грантҡа эйә булды. Унан башҡа, республика Башлығы инициативаһы менән балалар баҡсаларына эшкә килеүсе йәш тәрбиәселәр өсөн 575 мең һумлыҡ 50 грант булдырылды.

2020 йылдан бирле Башҡортостанда "Ауыл уҡытыусыһы" тигән проект бойомға ашырыла. Ошо проектҡа ярашлы, республика ауылдары, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән бәләкәй ҡалалар мәктәптәренә эшкә барыусы уҡытыусылар 1 млн һум кимәлендә компенсация түләүҙәре менән тәьмин ителә. Был сара ауыл мәктәптәрен тәжрибәле педагогтар менән тулыландырыу мөмкинлеген бирә.

***Әлбиттә, йәш педагогтарҙың профессиональ үҫешенә лә булышлыҡ итеү фарыҙ.*** Республикала, "Киләсәк уҡытыусыһы" тигән программаға ярашлы, педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең милли профессиональ үҫешен ғәмәлгә ашырыу сис-

✔ ***Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, XXI быуат башында республикабыҙҙа бер нисә тиҫтә башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары асылыуы башҡорт телен һаҡлау йәһәтенән бик мөһим фактор булды.***



темаһы эшләй башланы. Киләсәктә ошо программаға дөйөм белем биреү ойошмалары уҡытыусыларының 50 процентын йәлеп итеү күҙаллана.

2021 йылда, Рәсәйҙә беренселәрҙән булып, "Уҙымлы һөнәри әҙерлек үҙәге" асылғайны. Уның маҡсаты - педагогтарҙың профессиональ һәм карьера үҫешенә булышлыҡ итеүсе берҙәм эш системаһын булдырыу. Бында һәр педагогтың уҡытыу-тәрбиә эшендәге ҡаҙаныштары нигеҙендә артабанғы ижади-һөнәри үҫешенә булышлыҡ итеү саралары планлаштырыла. Уҡытыусылар, мәктәп кимәлендәге методик сараларҙа, районтарҙа һәм республикала уҙғарылған ғилми-ғәмәли конференцияларҙа, кәңәш ҡорҙарында ҡатнашып, үҙҙәренең тәжрибәһе һәм ижади проекттары менән уртаҡлаша ала. Шулай уҡ был йәһәттән йәш уҡытыусыларҙың күптән һыналған сараларҙа - "Йыл уҡытыусыһы", "Педагог -тикшеренеүсе" конкурстарында ҡатнашыуы, "Йәш педагог мәктәбе" эшмәкәрлегенә йәлеп ителеүе ошо проекттың ыңғай һөҙөмтәләрен арттырасаҡ. 2024 йылда беҙҙә ошондай бер яңы үҙәк асылыуы күҙаллана.

***Мәктәпкәсә йәштән башлап, урта мәктәпте тамамлағансы балаларҙың телмәр үҫешенә иғтибарлы булыу фарыз.*** Психологтар билдәләүенсә, баланың фекерләү кимәле, уның интеллектуаль мөмкинлектәре һәм һәләттәре уның тел байлығы менән бермә-бер бәйле. XX быуаттың күренекле психологы Л.С. Выготский ике теллелек мөхитендә тәрбиәләнгән бәләкәй генә балаларҙың телмәр үҫешен тикшереп, уларҙың бер юлы ике, йә иһә унан да күберәк телдәрҙе бер ниндәй ауырлыҡһыҙ үҙләштерә алыуы хаҡында яҙа. Әлбиттә, бала телмәренең күп яҡлы булыуы уның интеллектуаль үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Бының нейрофизиологик һәм психологик ерлеге бар. Күренекле физиолог-академиктар И.П. Павлов, А.А. Ухтомский, В.М. Бехтерев, П.К. Анохин, А.А. Бабский һәм башҡа совет ғалимдары үҙҙәренең тикшеренеүҙәрендә айырым һүҙҙәрҙең дә, бәйләнешле телмәрҙең дә кешенең юғары мейе эшмәкәрлеге процестары аша билдәле бер нейрофизиологик һәм психологик системалар рәүешендә нығыныуын билдәләй. Һүҙҙәр, телмәр ерлегендә барлыҡҡа килгән ошондай нейрон системаларын фәндә "икенсе сигнал системалары" тип атайҙар. Шәхестең интеллектуаль потенциалы миллионлаған нейрон күҙәнәктәре эшмәкәрлеге хасил иткән ошондай физиологик һәм психологик механизмдар аша формалаша. Тимәк, бер телде генә үҙләштергән шәхестәрҙең нейрон системалары базаһы ла ярлыраҡ була. Ике, өс һәм унан да күберәк телдәрҙе белеүселәрҙең, йәғни полиглоттарҙың икенсе сигнал системалары шундай үҫешкән һәм ҡатмарлы - ул бындай шәхестәргә үҙҙәре үҙләштергән теләһә ниндәй телдә иркен фекерләй алыу мөмкинлеген бирә. **Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең мәғарифта күп йылдар буйына фактик бер теллелек өҫтөнлөк итте (сит ил телдәрен өйрәтеү методикалары үҫешмәне, уларға ваҡыт аҙ бирелде). Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алыу фарыз: СССР-ҙың союздаш һәм автоном республикаларында предметтар туған телдәрҙә уҡытылғас һәм рус теле ныҡлап өйрәтелгәс, ике теллелек феномены барлыҡҡа килде, ә быны элекке мәғариф системаһының ыңғай күренеше итеп ҡарай алабыҙ. Тик шуныһы: бөгөн күпселек мәктәптәрҙә башҡорт теленә, ул дәүләт теле булыуына ҡарамаҫтан, уҡыу пландарында уны иркенләп һәм һөҙөмтәле өйрәтә алырлыҡ кимәлдә сәғәттәр ҡаралмаған.**

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, XXI быуат башында республикабыҙҙа бер нисә тиҫтә башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары асылыуы башҡорт телен һаҡлау йәһәтенән бик мөһим фактор булды, уҡыусыларҙың бер юлы өс тел өйрәнеүе күп теллелек феноменына нигеҙ һалды. Мәҫәлән, башҡорт, рус һәм инглиз телдәрен яҡшы белгән һөнәр эйәләре бөгөн донъяның теләһә ниндәй илендә йәшәй һәм эшләй ала. 90-сы йылдар уртаһында 136-сы Башҡорт лицейына башҡа илдәрҙә үҙенең инглиз телен уҡытыу буйынса оригиналь методикаһын пропагандалап йөрөгән ғалим-педагог, АҠШ-тың Юта штаты университеты профессоры Мак Кей килә. Был мәктәптә ул урта кластарҙа уҙғарылған инглиз теле дәресенә инергә теләк белдерә. Уҡыусылар ошо дәрестә, инглиз теленә параллель рәүештә, башҡорт һәм рус телдәрендә яңғыраған һөйләмдәрҙә ҡуллана. Америка профессоры шаҡҡата: һеҙ балаларҙы нисек итеп бер юлы өс телгә өйрәтә алдығыҙ, был бит мөмкин түгел! Әммә беҙҙең милли гимназия-лицейҙарыбыҙ уҡытыусылары тап ошо мөмкинлекте ғәмәлгә ашырҙы ла инде.

***Һуңғы йылдарҙа ошо йәһәттән Башҡортостан мәғарифында тағы ла бер ыңғай аҙымдың шаһиты булдыҡ: 2019 йылдан алып Башҡортостанда полилингваль мәктәптәр асыла башланы.*** Әлеге ваҡытта ошондай 8 мәктәп эшләй, балалар баҡсаларында 72 полилингваль төркөм асылды, Өфө ҡалаһында 2020 йылдан бирле Полилингваль балалар баҡсаһы ла булдырылды. Республика властары әйтеүенсә, киләсәктә ошондай мәктәптәр һәм балалар баҡсалары селтәре киңәйә барасаҡ.

Республикабыҙ мәғарифындағы заманса үҙгәрештәр хаҡында тағы ла күберәк бәйән итергә булыр ине, улар реаль эштәргә нигеҙләнгән. Меңәрләгән педагогтарыбыҙҙың эшмәкәрлеге ошо юҫыҡтан ситкә тайпылмаҫ, яҡын киләсәктә мәғариф системаһының һөҙөмтәле үҫеше өсөн яңынан-яңы шарттар булдырылыр, тип ышанайыҡ.

**Теманы дауам итеп, һүҙҙе 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназия директоры Ришат КАМАЛОВҡа бирәйек.**



**Һуңғы йылдарҙа беҙҙең мәғариф системаһында бығаса булмаған инновацион дөйөм белем биреү ойошмалары - полилингваль гимназиялар асылды. Ошондай уҡыу йортоноң төп маҡсаттары, үҙенсәлектәре, уҡыусылар составы, ата-әсәләрҙең балаларына бер юлы бер нисә телде өйрәтеүгә мөнәсәбәте, гимназиябыҙҙың бөгөнгө эшмәкәрлеге хаҡында һөйләп китһәгеҙ ине.**

- Рәсәй субъекттарында һәм Башҡортостанда полилингваль мәктәптәр асыу идеяһы балаларҙы, фән телендә әйткәнсә, мультилингваль һәм күп мәҙәниәтле шәхес итеп формалаштырыу маҡсатында тормошҡа ашырыла. Ошо йәһәттән Рәсәй һәм Башҡортостан етәкселегенә рәхмәт белдереү урынлылыр, сөнки ошондай уҡыу ойошмаларында уҡыусылар инновацион технологиялар нигеҙендә белем алһын өсөн үтә уңайлы шарттар булдырыла. Бына үҙем етәкләгән гимназия бишенсе йыл эшләй һәм, әйтергә кәрәк, байтаҡ ҡына уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәште. Бында аҡрын ҡыбырлап, хатта атлап та түгел, йүгереп йөрөп эшләргә тырышабыҙ, сөнки мәктәптәр араһында билдәле бер конкуренция бар, юғиһә, беҙҙе башҡа коллективтарҙың уҙып китеүе ихтимал, ә был беҙҙең статусыбыҙға кире тәьҫир итәсәген яҡшы аңлайбыҙ. Беҙ ниндәйҙер бер кимәлгә еткәнбеҙ икән, ошо планканан түбәнгәрәк төшөү яҙыҡ булыр ине. Ҡабатлап әйтәм, Р.Ф. Хәбиров башланғысы менән баш ҡалабыҙҙа ике полилингваль гимназия - беҙҙең һәм Дим биҫтәһендәге "Смарт" исемлеһе 2019 йылдан бирле эшләп килә, ә хәҙер уларҙың иҫәбе 8-гә етте. Иң элгәре уҡыусыларыбыҙ һәм педагогтарыбыҙ өсөн уңайлы шарттар булдырылды - элекке 44-се гимназия бинаһында капиталь төҙөкләндереү, реконструкция эштәре башҡарылды, яңынан 3 бина төҙөлдө, гимназия күҙгә күренеп ҙурайҙы һәм киңәйҙе. Ә Дим биҫтәһендәге гимназия өр-яңы бинаны туйланы.

Гимназия менән идара итеүҙә лә ыңғай үҙгәрештәр булды - 2022 йылда беҙгә республика гимназияһы статусы бирелде, ә был туранан-тура Мәғәриф министрлығына сығыу мөмкинлеген биргәс, төрлө проблемаларыбыҙҙы тиҙ арала хәл итә алыу мөмкинлегенә эйәбеҙ. Был статус гимназия эшмәкәрлеген финанслау яғынан да бик отошло. Белеүегеҙсә, ошондай гимназияларҙа рус һәм сит ил телдәре генә түгел, республикабыҙҙа йәшәүсе башҡорт, мари, удмурт, сыуаш телдәре лә өйрәнеләсәк. Ә был үҙе халыҡтарыбыҙ берҙәмлеген нығытыусы факторҙарҙың береһе икәнлеген һәйбәт аңлайбыҙ.

Беҙҙең гимназияла рус теле, башҡорт теле дәүләт теле һәм туған тел булараҡ, унан башҡа инглиз теле мотлаҡ өйрәнелә торған предметтар иҫәбендә. Бына нимә мөһим: байтаҡ ҡына рус балалары башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнергә теләк белдерҙе. Эйе, уларҙың ата-әсәләре дөрөҫ фекерләй: Башҡортостанда йәшәгәс, башҡорт телен белеү уларҙың балаларына киләсәктә яңы мөмкинлектәр бирәсәк, уларҙың һөнәри карьераһына булышлыҡ итәсәк, һәм тап шундай күп телле шәхестәребеҙ республика мәнфәғәттәрен яҡлаясаҡ, уны күтәрмәләйәсәк. Был хәл миндә ихлас ғорурлыҡ тойғоһон уята, сөнки беҙ телдәрҙе этномәҙәни нигеҙҙә - халыҡтарыбыҙҙың фольклоры, йолалары, сәнғәте, рухи мәҙәниәте аша өйрәтеү юлын һайланыҡ. Башҡорт телен гимназиябыҙҙың нигеҙ уҡыу планына ярашлы уҡытабыҙ, ул - мотлаҡ өйрәнелә торған предмет, сәғәттәр етерлек булһын өсөн физкультура, технология һәм һынлы сәнғәт предметтары төштән һуңға күсерелде.

Бынан башҡа уҡыусыларыбыҙ, үҙ теләктәренә ярашлы, ҡытай йә иһә испан телдәрен факультатив рәүештә өйрәнә ала. Был факультативтарҙы үҙ телдәрен яҡшы белгән кешеләр алып бара. Мәҫәлән, Ҡытай студенттарын йәлеп иттек, улар уҡыусыларыбыҙға иероглифтарҙы танырға һәм уҡырға, дөрөҫ әйтергә өйрәтеү менән бергә, үҙ илдәре, тормоштары, сәнғәте хаҡында һөйләйҙәр, фото-, видеолар күрһәтәләр, интернет селтәренән онлайн мәғлүмәттәр күрһәтәләр. Шуныһы ҡыҙыҡлы, иероглифтарҙы хәтерҙә ҡалдырыу өсөн балалар уларҙы үҙҙәренең аяҡ-ҡулдары, кәүҙәләре менән һүрәтләп күрһәтергә өйрәнәләр. Быны үҙенә күрә гимнастика яһауға тиңләп була. Занятиеларҙа йыр, музыка, бейеү элементтары, төрлө уйындар өҫтәмә методик сара итеп ҡулланыла. Бик арып китһәләр, бергәләшеп ултырып, сәй эсеп тә алалар. Бигерәк тә йәш белгестәр менән яҡындан аралашырға ярата уҡыусылар. Бындай дәрестәр бик ҡыҙыҡлы үтә, балаларҙың телде үҙләштереү мотивацияһы көсәйә.

Йәнә, гимназиябыҙҙа бишенсе йыл рәттән "Ағиҙел" тип аталған төбәк-ара тел олимпиадаһы уҙғарылып килә, ошо олимпиадала ҡатнашыу өсөн беҙҙең гимназияға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән байтаҡ ҡына уҡыусылар килә, был беҙҙең яуаплылығыбыҙҙы арттырыу менән бер рәттән, мәртәбәбеҙҙе лә күтәрә. Бағыусыларыбыҙ бар, алдан уҡ приздар алып ҡуябыҙ, мәҫәлән, былтыр еңеүсе уҡыусыға ноутбук тапшырылды.

Үҙебеҙҙең райондан башҡа, Өфөнөң бүтән районтарынан, яҡын-тирәләге ауылдарҙан, ҡасабаларҙан килеп уҡығандар ҙа бар. Беҙҙә тулы көн режимында уҡытыу һәм тәрбиә биреү индерелде. Был ата-әсәләр өсөн бик тә уңайлы: иртә менән эшкә барған ыңғайына балаларын гимназияла ҡалдырып, кискә табан, эштәрен тамамлағас, уларҙы алып ҡайталар. Балалар көн буйына ҡараулы, етмәһә, улар төштән аҙаҡ төрлө файҙалы эштәрҙә ҡатнаша ала. Төшкә тиклем дәрестәр теҙмәһенә ярашлы уҡыйҙар, унан һуң - төшкө аш. Үҙебеҙҙең ашханабыҙ бар, 6 ашнаҡсы һәм бер кондитер уҡыусыларыбыҙҙы бик һәйбәт аштар менән һыйлай. Кондитерыбыҙ бешергән тәмле ҡамыр ризыҡтарын балалар бик теләп ашай. Ашау өсөн түләү артыҡ күп түгел, Хөкүмәт яғынан айырым категориялағы уҡыусыларға ташламалар ҡаралған, ә башланғыс класс уҡыусылары, федераль программаға ярашлы, бушлай туҡлана.

Башҡорт телен өйрәнеүгә ыңғай мөнәсәбәт барлыҡҡа килде. Дәреслектәрҙе тоттороп, уҡырға-яҙырға өйрәтеү менән генә сикләнмәйбеҙ. Конкурстар, викториналар уҙғарыла, йәнә күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар балаларҙың тел өйрәнеүгә ҡарата мөнәсәбәтенә ыңғай йоғонто яһай. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев, этномузыкант Зәйнетдин, талантлы ҡумыҙсы Миндеғәфүр Зәйнетдинов менән осрашыуҙар үтә тәьҫирле булды. Беҙ ошо рәүешле "Уңышҡа юл" тигән проектты ла ғәмәлгә ашырабыҙ. Миндеғәфүр Зәйнетдиновтың улы, Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған Азамат Зәйнетдинов беҙгә эшкә килде, ул бында ҡумыҙсылар һәм ҡурайсылар ансамблдәрен етәкләйәсәк. Уҡыусылар араһында ошо инструменттарҙа уйнарға өйрәнергә теләүселәр етерлек. Тәрбиә эшендә төрлө яңы алымдар уйлап табабыҙ. Дискотека уҙғарабыҙ икән, шул уҡ башҡорт көйҙәрен ҡуябыҙ, тәнәфестәрҙә башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары хаҡында һөйләйбеҙ. Патриотик тәрбиә лә иғтибарыбыҙ үҙәгендә: 3 Шайморатов класы бар, уларға иң алдынғы, әүҙем уҡыусыларҙы һайлап алабыҙ. Бик көслө кластар барлыҡҡа килә, хатта ошо кластарҙа уҡырға теләүселәр араһында үҙенсәлекле көнәркәшлек хасил була, сөнки уларҙа юғары сифатлы белем алыу ҙа төп маҡсаттарҙың береһе итеп иҫәпләнә. Был уҡыусылар өсөн үҙенә күрә бер юғарыраҡ баҫҡыс булып тора. Беҙ буласаҡ хәрбиҙәрҙе әҙерләмәйбеҙ, шайморатовсы уҡыусыларыбыҙ алдында киләсәктә республикабыҙҙың етәксе кадрҙар резервына инеү маҡсатын ҡуябыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

***✓ Бөгөнгө студенттарҙы китапханаға йөрөтөү бик ҡыйын, ә интернетта бөтәһе лә бар, шуны иҫәпкә алып, уҡытыусылар төрлө эштәрҙе башҡарғанда студенттарға интернет ҡулланырға рөхсәт итә.***



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Белем биреү өҙлөкһөҙ булғанда ғына һөҙөмтәле була. Сирек быуат тарихлы Сибай институты был йәһәттән үҙенең кәрәклеген, булған, бар, буласағын фиҙаҡәр хеҙмәте менән иҫбатлай, тырышып-тырышып киләсәккә юл ярып, үҙ тарихын яҙа. Ғәҙәттәгесә, өйрәнелгәнсә, ул быйыл да үҙ ғаиләһенә, ҡанаты аҫтына юғары белемле булырға хыялланғандарҙы тупланы. Быйыл ниндәй үҙгәрештәр бар, йәштәрҙең белем алыуға мөнәсәбәте элеккесәме? Шундай һорауҙар менән Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай институты директоры Илдар Сәлихйән улы ХӘМИТОВҡа мөрәжәғәт иттек:**

# УҠЫУ КӘРӘК!



- Быйылғы ҡабул итеү кампанияһында институттың өс факультетына 213 бюджет урыны бүленде, дүртенсе, иҡтисад һәм хоҡуҡ факультеты өсөн бындай мөмкинлек ҡаралмаған. Был күрһәткес, былтырғы менән сағыштырғанда, 27 урынға күберәк. Шуныһы ҡыуаныслы: быйыл ҡабул иткән студенттарҙың 60 проценты төрлө колледждарҙан килделәр. Уларҙың уҡырға күп килеүҙәре беҙгә бик уңай, сөнки махсус белеме булғандарға артабан уҡыуы ҡыйын түгел, беҙгә лә улар менән эшләүе еңел, улар студент тормошон беләләр.

Документтарҙың иң күбеһен уҡытыусы һөнәрен алыуға бирҙеләр. Кәрәкле булыуға ҡарамаҫтан, быйыл программист һөнәренә конкурс уҡытыусыларға ҡарағанда әҙерәк булып сыҡты. Әлбиттә, ҙур булмаһа ла, бөтә бюджет урындарына ла конкурс булды. Мәктәп тамамлағандарҙы Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре буйынса һайлап алдыҡ, колледж тамамлағандар төрлө фәндәрҙән, һайлаған һөнәренә ярашлы имтихандар тапшырҙы.

Абитуриенттарҙың иң күбеһе Сибай ҡалаһынан, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил райондарынан килде. Урал аръяғы йәштәренең Сибай институтын һайлауы ғәҙәти хәл. 12 кеше Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районынан килде. Бөртөкләп булһа ла Йылайыр, Белорет райондарынан да киләләр. Быйылғы ҡабул итеү кампанияһында тағы бер үҙенсәлек күҙәтелде: бюджет урындарына дәғүә итеүсе абитуриенттарҙың 3/2 өлөшө документтарын Госуслуги аша тапшырҙы.

Уҡырға ингәндәрҙең бөтәһен дә дөйөм ятаҡтарға урынлаштырҙыҡ, ситтән тороп уҡығандарға ла урындар буласаҡ. Беренсе, икенсе курс студенттары өсөн ҡунаҡтар саҡырып, тантаналы линейка үткәрҙек, теләктәребеҙҙе еткерҙек.

Мин 2001 йылдан Сибай институтында эшләйем, 2017-2021 йылдарҙа педагогия колледждын етәкләнем, шуға институтта ниндәй үҙгәрештәр булғанын күреп-белеп-тойоп торам. Элек үҙебеҙ студент булғанда, эшләй башлағас та, төрлө сараларға ынтылып бара торғайныҡ. Әле лә институтта, ҡалала, Өфөлә шундай саралар күп үткәрелә, тик ынтылып тороусыларҙың һаны кәмей бара, күптәрҙе өгөтләргә тура килә. Комфорт хәленә өйрәнгән студенттар төрлө секцияларға ла әҙерәк йөрөй башланы. Әлбиттә, уларҙың күбеһе интернет донъяһына, ундағы мәғлүмәттәр тулҡынына башкөллө сумған. Шуға ла студенттарҙы ошондай үҙ-үҙенә йомолоуҙан арындырыу, уларҙы йәмғиәткә файҙалы эштәргә, мәҙәни сараларға ла ылыҡтырыу яйын табырға тырышабыҙ. Төрлө өлкәлә эшләп йөрөгән, институт сараларына ваҡыты ҡалмағандарға ла ярҙам итәбеҙ, бигерәк тә һуңғы курс студенттарына.

Уҡытыусылар үҙҙәре лә замандан артта ҡалмаҫҡа тейеш, быны улар яҡшы аңлай. Йәштәрҙе интернеттан айырып булмай икән, уны дәрестәрҙә файҙалы итеп ҡулланырға кәрәк. Интернет селтәре һәр бер аудиторияла бар, уны ҡасыпбоҫоп ҡулланыу кәрәкмәй. Етмәһә, бөгөнгө студенттарҙы китапханаға йөрөтөү бик ҡыйын, ә интернетта бөтәһе лә бар, шуны иҫәпкә алып, уҡытыусылар төрлө эштәрҙе башҡарғанда студенттарға интернет ҡулланырға рөхсәт итә. Хәҙер бит күп студенттар имтихандар бирмәй, балл рейтингы системаһы буйынса эш итәләр. Семестр буйына, мәҫәлән, студент 60 балл йыйһа, уға зачет ҡуйыла, 80-90 балл йыйғандарға 4-5 билдәһе ҡуйыла, шуға ризалашҡандар бөтөнләй имтихан бирмәйҙәр. Риза булмағандар, элеккесә, билеттар буйынса имтихан тапшыра. Шуға, студенттарға йыл буйына тырышып уҡыу отошло.

Киләһе йылдан Болонья системаһынан сығып, элекке һымаҡ, юғары белемле уҡытыусылар, инженерҙар әҙерләй башлаясаҡбыҙ, әле уҡырға ингәндәр бакалавр булып сығалар. Ниндәй генә заман булмаһын, студенттарҙың төп эше - уҡыу. Белем алам тиһәң, уҡырға кәрәк. Уңышлы булам тиһәң, уҡырға кәрәк. Һөнәр алам тиһәң, уҡырға кәрәк. Юғары эш хаҡы алып эшләйем, тиһәң дә уҡырға кәрәк. Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән ораны һәр саҡта ла әһәмиәтен юғалтмай.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШ,

## туған телдә уҡы!




**"Беҙ башҡорт теленә, уны һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Туған телдә рәхәтләнеп һөйләшкән, уны яратҡан һәм был һөйөүҙе башҡаларға тапшырған әүҙем һәм битараф булмағандарға артабан да ярҙам итәсәкбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрендә. Ысынлап та, Башҡортостанда башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса арыу ғына саралар, эштәр башҡарыла икәне бәхәсһеҙ. Ҡайһы берҙәрен айырып билдәләп үтәйек әле.**

● 2019 йылда Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығында - Милли мәғариф идаралығы, ә Мәғарифты үҫтереү институтында Милли белем биреү буйынса ресурс үҙәге булдырылды.

● 2019 йылда I Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезы үткәрелде. 2020 йылда был структуралар Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Төбәк-ара форумын, 2023 йылдың октябрендә полилингваль белем биреү буйынса I Халыҡ-ара форумды ойоштторҙо. Был форумдарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала, Сибайҙа, Учалыла, Хәйбулла һәм Мишкә райондарында һигеҙ полилингваль мәктәп асылды.

● Башҡортостанда 3,52 миллион һумлыҡ дөйөм финанслау менән "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телен һәм дәүләт телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" айырым дәүләт программаһы ҡабул ителде. Уның сиктәрендә 2019-2023 йылдарҙа 133 мәктәп класы интерактив таҡталар, проекторҙар, ноутбуктар һәм күп функциялы ҡоролмалар менән йыһазландырылды.

● Рәсәйҙең башҡа төбәктәре мәктәптәренә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса 30,9 мең дана уҡытыу һәм уҡытыу-методик әҙәбиәт ебәрелде. БР Мәғарифты үҫтереү институты базаһында бушлай квалификация күтәреү курстары, туған тел уҡытыусылары, шул иҫәптән илдең башҡа төбәктәренән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн яңынан һөнәри әҙерлек курстары үткәрелә килә. Мәҫәлән, 2019 йылдан 2022 йылға тиклем 340 башҡорт теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте, сыуаш теле һәм әҙәбиәте, удмурт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы квалификацияһын күтәргән. Йыл һайын башҡорт теле мәсьәләләре буйынса төрлө ғилми-ғәмәли конференциялар, форумдар, семинарҙар үткәрелә, профилле сменалар индерелә.

● Полилингваль мәктәп уҡытыусыларына ярҙам итеү өсөн 2019 йылда уҡ үҙ предметтарын ике йәки унан күберәк телдә алып барған педагогтарҙың эш хаҡына 15 процент өҫтәмә билдәләнгән. Ә быйыл республиканың полилингваль мәктәптәре хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡына 20 процент күләмендә өҫтәмә түләүҙәр индереләсәк, был дөйөм эш хаҡы кимәленә һиҙелерлек йоғонто яһаясаҡ.

● Шулай уҡ балалар баҡсаларында туған телде уҡытыу төркөмдәрендә эшләгән тәрбиәселәргә һәм уҡытыусыларға эш хаҡы 15 процентҡа арттырылды.

● 2022 йылда республика Мәғариф министрлығы "Туған телдә уҡытҡан мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" айырым һөнәри оҫталыҡ конкурсын башлап ебәрҙе. 2023 йылда "Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика профессиональ конкурсы һәм уның сиктәрендә уҙғарылған "Туған телдә уҡытыу менән мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" конкурсы еңеүселәренә һәм лауреаттарына Башҡортостан Башлығы премияһы булдырылды.

● Шул уҡ ваҡытта яңы кадрҙар әҙерләү өсөн киләсәккә нигеҙ булдырыла. 2023 йылда иң яҡшы башҡорт һәм рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына тапшырылған БР Хөкүмәте премиялары һаны 50-нән 100-гә тиклем арттырылды. 50 мең һум күләмендә аҡсалата дәртләндереүгә дәғүә итеүселәр иҫәбенә туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары һәм республиканың полилингваль мәктәптәре уҡытыусылары индерелгән.

● 2023 йылда Башҡорт дәүләт педагогия университетында "Полилингваль белем биреүҙә филология дисциплиналарын уҡытыуҙың заманса технологиялары" айырым магистр программаһы асылды. Беренсе курста 16 студент ҡабул ителде.

● Өфө фән һәм технологиялар университетында "Медиайыйын" республика журналистар форумы йомғаҡтары буйынса 2022-2023 уҡыу йылында "Журналистика" төркөмсәһенең эшмәкәрлеге тергеҙелде - унда 10 кеше уҡырға инде.

● 2021 йылда Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиаданы Рәсәй Мәғариф министрлығы раҫлаған олимпиадалар һәм конкурстар исемлегенә индереү һөҙөмтәһендә Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада лауреаттарына һәм еңеүселәренә республика биләмәһендәге юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндә 5-10 өҫтәмә балл иҫәпләнә.

**Шулай итеп, былар пландар һәм һүҙҙәр генә түгел, ә аныҡ эштәр, мәктәптәргә һәм уҡытыусыларға маҡсатлы ярҙам, ижадҡа һәм әүҙем емешле эшкә этәргес, тип билдәләнеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығында.**

ХӘТЕРКИТАП

# БЕР ЙОТОМ ҺЫУ



Дуҫтарға килгәндә, йәшерәк саҡта улар күп инеләр, саманан тыш күп инеләр. Таңға саҡлы шаулы табындар артында йырлашып-бейешеп ултырыуҙарҙы, кесе, оло, кемдәрҙер уйлап сығарған байрамдарҙы ҡоро ҡалдырмай, геүләтеп байрам итеүҙәрҙе әйтеп тә тормайым. Ваҡыт үтеү менән дуҫ тигәндәрем, кәмегәндән-кәменеләр, күҙ менән ҡаш араһында, ҡомға һеңгән һыу тамсыһылай, юҡҡа сыҡтылар. Кемеһелер мәңгелек йортона күсте, кемеһелер минән ҡасты, кемеһелер мине һатты, кемеһенәләр, һуңынан асыҡланыуынса, тел, ҡул ярҙамым ғына кәрәккән.

Юҡ, бер кемде лә ғәйепләмәйем хәҙер, күнелемдән хөкөм дә итмәйем, тимәк, шулай теләйеш, шулай кәрәк булған. Улайға уҡ китһә, мин дә аҡтан-аҡ, сафтан-саф, бары яҡшылыҡтарҙан, игелектәрҙән әүәләнгән фәрештә түгелмен бит әле, тимәк, уларҙың шәхесемдә үҙенмәүҙәрендә минең дә ғәйебем бар. Тик әле генә "Әгәр гонаһтарҙың еҫе булһа, минең эргәлә бер кем дә ултырмаҫ ине!" тигән аҡыллы фекергә уҡыным. Ологайған һайын дуҫтар кәмей бара, дуҫтар, тиеп олонан һалдырһам да, улар бөгөн бер ҡулдың бармаҡтары менән генә һанарлыҡтар, ауыҙҙан берәм-һәрәм төшкән тештәр һымаҡ, кәмегәндән-кәмей баралар. Билдәле, алтын теш ҡуйҙырыу менән генә ҡартайып бөлшәйгән, өнрәйгән ауыҙ йәмләнеп китмәй, киткән дуҫтар ҙа алтынкөмөшкә барып олғашмай. Хәйер, һәр ваҡытағыса һүҙ сыбалтам, төп хәбәргә күсәйем әле.

Әсәйем көтмәгәндә үлемесле сир менән сирләп китеп түшәккә ятты. Ҡатыным Вәсилә, быйна күрерһең әле, бейемем аяғына баҫып китә ул, тигән булып, өмөт менән унда-бында йүгермәләй, алдына бешереп-төшөрөп унышын-быныһын ҡуйған була. Әсәйем иһә, килененә яратып ҡарап ала ла тәгәм ҡабырға теләмәүен белдереп, йөҙөн ситкә бора. Элекке медицина хеҙмәткәре булараҡ, сирҙең ни менән барып, ҡасан тамамланырын мин генә беләм, алған һөнәремә ярашлы аныҡ беләм. Белгәс үтә лә ҡыйын, башҡалар ише бер ни белмәй, бер ни тоймай, ҡыҫыр, тормошҡа ашмаҫ өмөткә алданып тыныс ҡына йәшәргә ине...

Әсәйем карауатта ята, ә мин йолҡош бесәй балаһылай, әсәйемдең эргәһенә, иҙәнгә матрац түшәп, шунда йомарланғанмын. Юҡ, йоҡламайым, бары өн менән төштә бутап әүәлийем генә. Шылт иткән тауыш ишетелһә, ырғып тора һалам; укол дар ҡаҙайым, ауырыуҙың яҫтығын ҡабартып һалам, юрғанын төҙәтеп ябам. Әсәйем оҙон төндә йоҡлай алмағас, үҙенә-үҙе әллә нисә тапҡыр ясин сыға, ә мин шул мәлдәрҙә өнһөҙ-һүҙһеҙ, йәшереп кенә илайым, ҡәҙерле әйберенән яҙған малай һымаҡ илайым. Тураһын әйтергә кәрәк, илайым мин йыш ҡына, кеше күҙенән ҡасып илайым, хатта йылмайып ултырып та эстән илаған, һыҡраған саҡтар бар...

- Хәйҙәр, һин йоҡлайһыңмы ул?

- Әллә нишләп йоҡом килмәй, шуға тик кенә ятам әле. Ауыҙыңды сылатҡың килһә, һыу бирәйемме әллә?

Әсәйем мин килтергәндә уртлай:

- Был һыу ҡайҙан?

- Балнис ҡоҙоғонан.

- Шулайҙыр. Беҙҙең ауылда бит өс ҡоҙоҡ бар, өсөһөнөң тәме өс төрлө. Ә бына мин сабынлыгыбыҙ аҫтындағы бер сығанаҡты беләм. Бына, исмаһам, уның тәме, уның таты һаман да телем осонда! Хәтерләйһеңме, һин бала саҡта еләккә тип барып, суҡтарылып ултырған сейәлеккә барып сыҡҡайныҡ? Һауыттарыбыҙ тулып бөткәйне, ә беҙ туймаҫтай булып тирәбеҙ ҙә тирәбеҙ, тирәбеҙ ҙә тирәбеҙ... Шунан ҡайтҡас, шул сейәләрҙе күрше-тирәгә тотошлайы менән өләшкәйнек...

- Хәтерләмәгән ҡайҙа, Ел ояһындағы сейәлек ине бит ул! Мин килеп тороп сарсағайным, ауыҙым кипкәйне...

- Һағынып һөйләргә ҡалды ул саҡтар... Әллә нишләп сейә ашағым килеп киттесе...

- Сейә мәле үтеңкерәп ҡалды, әсәй, шулай булһа ла көн яҡтырыу менән шул тирәгә барып әйләнермен. Моғайын да, ышыҡҡа боҫҡандан ике-өс бөртөк табылыр.

- Юҡ, минең баҡса сейәһен ҡапҡым килә...

Аптырап ҡалдым:

- Беҙҙең ауылда баҡса сейәле өйҙәр юҡ бит әле...

- Беләм. Ятам шунда юҡты таптырып... Ашағым килмәй инде хәҙер, минең мыжыуым бөтмәҫ...

Иртәнге сәйҙе эскәс тә мотоциклды ҡабыҙып алып, беҙҙән 40 саҡрымда ятҡан район үҙәгенә ҡарай елдерҙем. Барып еткәс, тура баҙар майҙансығына барҙым. Бына бәлә - башҡа емеш-еләкте хет күнәкләп, хет тоҡлап ал, ә бына сейә тигәнең әжәл дарыуылай юҡ, хәйерһеҙ. Таныштарҙы теүәлләй торғас, таптым һыуыҡтыҡта тундырылған бер көрөшкә самаһы сейәне. Алтын тапҡандай ҡыуанып, ҡайтыу яғына елдерҙем. Ҡайтып төшһәм, Рәүеф Селәүсинов беҙҙең баҡса ултырғысына һаҡҡан. Ул беҙгә ауыл хужалығы институтын тамамлап, баш ветврач булып эшкә килгәйне. Уның ғаиләһе менән аралашып, дуҫлашып йәшәйбеҙ. Өйҙә сирле ятҡанда һөйләшкән-аралашҡың килеп торамы, теләкһеҙ генә тегенең эргәһенә һаҡтым.

- Ҡайҙа юғалдың? - ти Рәүеф.

- Йылайырға эш менән барҙым. Оҙаҡ көттөңмө?

- Юҡ, бына әле генә килеп ултырыуым.

- Ни эш бөтәрһең?

- Эш тип ни... Инәйҙең янына ингәйнем хәлен белергә. Ә уның Ситлек ҡоҙоғоноң һыуын уртлағыһы килә икән...

- Бына һинә мә, урман төпкөлөндәге Ситлек ҡоҙоғон табырға һин беҙҙең ауыл кешеһе түгелһең дә баһа!

- Шулай шул. Инәйҙең теләген үтәйем, тип, матай көймәһенә бетон һалып алып киттем теге ҡоҙоҡто эҙләргә. Ялан кешеһе булараҡ, юлдан яҙҙым, аҙашып бөттөм, әллә кемдәрҙең сабынлыҡтарына барып юлыҡтым. Бесән сабыусылар нимәне эҙләүем менән ҡыҙыҡһынғас, йомошомдо әйттем. Ҡайһы берәүҙәр мине һантыйға иҫәпләп, ҡул ғына һелтәй: "Һыу кәрәкһә ни, аҙашып йөрөгәнсе, ауыл ҡоҙоғонан бар ҙа һоҫ, ауырыу уны белеп-күреп ята тиһеңме!" Юҡ, мин әйтәм, был ожмах һыуын табып алып ҡайтыу - намыҫ эше. Эҙләнеп йөрөй торғас, өйрәтеүселәр осраны, таптым Ситлек ҡоҙоғон, ә ул үҙәндә таш аҫтынан һығылып сығып ятҡан шишмә икән, селек-тубылғы япҡанлыҡтан, барып төртөлмәйенсә күренмәй ҙә. Һыуын уртланым, ысынлап та, тештәргә үтмәле һалҡын, үҙе терегөмөштәй саф инеш икән дә баһа. Быйна алып ҡайттым, әйҙә, инәйгә инәбеҙ!

Әсәйем бер бөртөк сейәне ҡабып, килтерелгән һыуҙы уртланы ла рәхмәтле төбәлде:

- Үҙем дә туйҙым, күнелем дә туйҙы, балалар, һыуһыным ҡанды, имен-аман ғына йәшәгеҙ, минән фатиха...

Ысын дуҫлыҡ хаҡында һүҙ сыҡһа, нишләптер, шул бер йотом һыу иҫкә килә лә төшә. Дуҫлыҡ, тигәнең, бәлки, ысынлап та бер уртлап йотор саф һыуҙыр ул...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КЕМГӘ ЙӘШӘҮ ЕҢЕЛЕРӘК?

**(Башы 6-сы биттә).**

"Йыуан ҡорһаҡ" сауҙагәрҙең эшен дә һис кенә еңел тип әйтмәҫ инем. Үҙем бер нисә йыл алыпһатарлыҡ менән булышып ҡарап та, ҡулымдан килмәне, башҡаса унда бөтөнләйгә яҡынламаҫҡа ҡарар иттем...

Йәнә бер бик мөһим һөнәрҙәрҙең береһе булған уҡытыусыны алып ҡарайыҡ. Был эштең ни тиклем ауыр икәнлеген дә аңлай белеү кәрәктер. Матур, үтекләнгән кейем кейеп, хушбуй һөртөп кенә йөрөгән мөғәллим-мөғәллимәләребеҙҙән эшен бала сағымда мин дә бик еңел генә кеүек күрә инем. Гел шат йөҙлө тойолған был ағай һәм апайҙарҙың үҙҙәренең ғаиләләре бөтөнләйгә юҡ һымаҡ тойола торғайны. Сөнки, ҡасан ҡарама, эш ваҡытынан тыш, уларҙың мәктәптә балалар менән ниндәйҙер булһа берәй сара йә өҫтәлмә дәрестәр үткәреп йөрөгәнен күрәһең. Төп вазифаһын үтәү менән бер рәттән, иңдәренә класс етәкселеге, тағы әллә күпме йөкләмә бирелеүе, "уҫал директор" тарафынан йыш ҡына әрләнеүҙәре хаҡында һуңғараҡ белгәс, уларҙы йәлләй ҙә башланым. Ошо яҡын кешеләремдең күптәре бөгөн был донъяла юҡ инде. Үҙенең берәй уҡыусыһының вузға инеп киткәнлеге йә башҡа ниндәйҙер уңышы хаҡында ишетеп, ысын күнелдән шатланышҡан шул ағай-апайҙарым әле булһа күҙ алдымда.

...Бәлки, бәғзе берәү хәҙрәттәр, йәғни дин әһелдәре башҡаларға ҡарағанда күпкә анһатыраҡ йәшәй тип уйлайҙыр? Эйе, "өйҙән-өйгә ҡунаҡ булып, бәлеш ашап йөрөүҙең ниндәй ауырлығы булһын", тип һанаусылар ҙа юҡ түгел. Әммә мин быйндай фекер менән дә һис килешеп етмәйем. "Үлгәндәргә аят уҡып, сабыйҙарға исем ҡыҫҡырып, кеҫәгә саҙаҡа һалып алып ҡайтып китеү еңел бит ул", тигән һымағыраҡ һүҙҙәр имамдарҙың эш үҙенсәлеген бөтөнләйгә белмәүҙән килеп сыға. Бәлки, кемгәлер ярамһаҡланып, башҡаларға дин тарафынан бер ниндәй ҙә талаптар ҡуймаған, тап ана шулай рәхәт йәшәгән муллалар ҙа барҙыр, әммә мин ундайҙарҙы белмәйем. Ә дин әһелдәренә бер дәүерҙә лә еңел булмаған. Был хаҡта күп кенә уҡығаным, яҙғылағаным да бар. Имам хәҙрәттәрҙең иң төп бурысы - кешеләрҙе хаҡ юлға өндәү, Аллаһ Тәғәләнең берлеге, йәғни тәүхид хаҡында белем биреү, иман шарттарын, Ислам терәктәрен аңлатыу. Халҡыбыҙҙы дин ҡанундары үтәүгә - изге юлға өндәгән принципиаль муллаларҙы ҡайһы берәүҙәр, ысынлап та, яратып етмәй шул, үкенескә.

Ғайса Хәсәйеновтың "Ризаитдин бин Фәхретдин" исемле тарихи китабын ғына алып ҡараһаҡ, остазыбыҙҙың шәкерттән алып мөфтөйгәсә үткән юлында ниндәй генә ҡаршылыҡтар булмаған. Берҙән, уға Аллаһ Тәғәлә тарафынан ҡушылған хаҡиҡәтте халыҡҡа еткерергә кәрәк булһа, икенсе яҡтан, шуның өсөн уны батша хөкүмәте, унан большевиктар власы ҡыҫырыҡлаған. Изге юлдағы был ғалимыбыҙға ҡурҡыу белмәҫ йөрәк, сабырлыҡ кәрәк булған. Һәр төрлө ялыусы, ошаҡсыларҙың аяҡ салыуына, полицайҙарҙың эҙәрлекләүенә ҡарамай, Раббыбыҙ алдында үҙ бурысын намыҫлы үтәгән был дин әһелен белеүселәр бик аҙ. Бөгөнгө көндә лә арыу-талыу белмәй, халҡыбыҙға динебеҙ нигеҙҙәрен өйрәтеүсе, яҡташтарыбыҙҙы хаҡ дингә әйҙәүсе имам-хәҙрәттәребеҙ бар. Был мөғәллимдәребеҙҙең изге эшенә Раббыбыҙ ярҙам бирһен!

...Ниһайәт, "юғары эшелондар"ыбыҙға ла күҙ һалып алыу кәрәктер. Башта әйтмешләй, батшаларҙың йәшәү рәүешен берәүҙәр ғәйәт еңел, башлыса, кәйеф-сафа ҡороп ғүмер итеүҙә күрһә, был да оло хата булыр. Беҙ бала саҡта, батша-байҙарҙың барыһын да яманлап, беҙҙең күҙ алдына ҡуйҙылар. Әммә борон-борондан уларға ла бер ҡасан да йәшәү рәхәт булмаған. Бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарап, өлкә, ҡала һәм төрлө район хакимиәте башлыҡтарының эше иң ауырылыр, тип уйлайым. Барыбыҙҙыҡына ҡарағанда ла. Телетапшырыуҙарҙа был етәкселәрҙең өҫтәл артында ултырғанын йә иһә берәй ойошмала уларҙы тантаналы ҡаршы алыуҙарын ғына күрәбеҙ. Әммә улар ҙа нәҡ беҙҙең һымаҡ әҙәм балаһы, һәр кемеһенең үҙ ғаиләһе бар икәнлеген онотмайыҡ. Етәкселәребеҙҙең һәр саҡ ҙур эске көсөргәнеш кисереп ғүмер итеүе хаҡында фекерләп алыу кәрәктер, минеңсә. "Иван Васильевич меняет профессию" тип аталған кинокомедиялағы батшаның "Вот говорят царь, царь... Думаешь, царям легко?.." тигән һүҙҙәре менән һәр кем таныштыр. Бөтә ил (ҡала, район), ундағы көн иткән халыҡ тормошо өсөн үҙенә яуаплылыҡ алған быйндайҙар, ысынлап та, кеҫле рухлы, батыр йөрәкле кешеләр. Уларҙың хәленә лә инергә кәрәктер тип һанайым. Һәр ерҙә төрлө-төрлө иҡдисади һәм башҡа ҡытыршылыҡтар ҙа булып тора, шуңһыҙ ҙа булмайҙыр, тормош бит. Ана шуларҙың барыһын да хәл итергә өлгөрөп барыусы бит улар. "Был түрәлек һинә бирелгәндер, аҡылдарың камилға күрә..." тип тә йырлаған ата-бабаларыбыҙ. Ҡыҫҡаһы, һәммәбеҙ, башҡаларҙың эшен тикшермәй, үҙебеҙгә йөкмәтелгән эште урын еренә еткереп атҡарып өйрәнергә тейешбеҙ. Бәйғәмбәребеҙҙән с.г.с. "Аллаһ Тәғәлә һәр эште яҡшы итеп эшләүсене ярата" тигән мәғәнәле хәҙисте беләйек.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**оставкалағы хәрби табип.**

✓ Уларҙан ғибрәт-өлгө алайыҡ, маңҡорт булмайыҡ. Беҙгә өйөбөҙгә килеп торһон үҙ матбуғатыбыҙ, һөйләп торһон үҙебеҙҙең радио, телевидениебыҙ, клубҡа барһаҡ, уйнап торһон үҙ йәштәребеҙ, мәсеттә вәғәз әйтһен үҙ муллабыҙ...



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺЫУҺАМАҒЫҘ

■ Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһөҙлөк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Улар фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти улар. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә тән температураһы күтәрелә.

■ Британия ғалимдары йоҡоноң ниндәйҙер ҡарарҙар ҡабул итеүҙә мөһим роль уйнауын дәлилләгән. Йоҡлаған ваҡытта кеше аңға ябыҡ булған мәғлүмәт ала икән. Тикшеренеүҙәрҙә 27 ир-егет һәм 34 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Улар бер-бер артлы ябай һәм ҡатмарлы мәсьәләләр сисергә тейеш була. Ҡатнашыусылар мәсьәләләр сисеү арауығында ятып йоҡлап алыу мөмкинлегенә эйә була һәм ғалимдар асыҡлауынса, йоҡлап алыусылар башҡаларға ҡарағанда ҡатмарлы мәсьәләләрҙе күберәк сисеүгә өлгәшә.

■ Ғалимдар дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының - депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Бөгөн күптәр дарыуҙар урынына халыҡ дауаһы ҡулланырға тырыша. Вируслы миҙгел ауырыуҙары әүҙемләшкән мәлдә баҙам (миндаль) сәтләүеге ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Быға тиклем баҙам йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен профилактикалау, холестерин кимәлен түбәнәйтеү өсөн ҡулланыла ине. Бының өсөн кардиологтар көнөнә яҡынса 90 грамм баҙам ашарға кәңәш итә. Күптән түгел Норича (Бөйөк Британия) һәм Мессин ҡалаһы университеты (Италия) ғалимдары был сәтләүектең иммун реакцияларын көсәйтеү һәм вирустарҙың әүҙемлеген кәметеү һәләтен билдәләгән. Сәтләүектең тиресәһендә булған матдәләр лейкоциттарҙың әүҙемлеген арттырып, вирустарҙың күҙәнәк эсенә үтеп инеүен тотҡарлай. Баҙамдың организмға ыңғай тәьҫире ул тулыһынса эшкәртелеп бөткәс тә һаҡлана әле.

■ Тауыҡ ите, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, диңгеҙ балығынан торған диета баш мейеһе ҡартайыуын булдырмай һәм хәтерҙе нығыта. Быларҙың барыһын да холин - В витамины төркөмөнә ингән витамин башҡара. Британия ғалимдары асыҡлауынса, холинға бай ризыҡтар менән туҡланыусылар төрлө тестарҙы яҡшыраҡ үтә. Ғалимдар билдәләүенсә, ул инсульт менән бәйле хәүефте лә түбәнәйтә.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Башҡорт кешеһенең донъяны ҡабул итеүе бер ҙә матди байлыҡтар менән бәйләнмәгән шул. Әлмисаҡтан алып әҙәм күңеленә бирелгән моң, уй-хис, хыял тулҡындары - фәнни тел менән әйткәндә, рухи энергиялар менән йәнгә-йән килеп аралаша башҡорт. Сөнки бөтә тәбиғәт, Йыһан закондары энергиялар тулҡынынан, йәндәр торошонан хасил. Ниндәй энергия-йән әйҙәүендә йәшәйһең, үҙеңдән ниндәй энергия-ғәмәл ҡалдыраһың, шул ғына борсой тәбиғәт ҡануны менән йәшәгән йәнде. Ветеран-уҡытыусы, Өфө районы Шамонин ауылының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәйфә Фирғәле ҡыҙы ВӘЛИЕВА менән әңгәмәләшкәндә ошолар хаҡында уйланылды.**

# ФАТИХАЛАРЫБЫҘ, ДОҒАЛАРЫБЫҘ...

## тормошобоҙға тыныслыҡ-именлек ҡайтарһын



Рәйфә Фирғәле ҡыҙы Федоровка районы Яңы Яуыш ауылы ҡыҙы. Ул үҙенең тормош сәхифәләрен ғүмер буйы башҡарған ғәмәлдәре менән генә түгел, ә тыуған ерҙең, ырыуҙың тарихы менән аралаш бәйән итә. Кем менән әңгәмәләшһә, кемдәр алдында сығыш яһаһа ла, һүҙен мотлаҡ тыуған төбәк тарихынан башлай: "Райондағы башҡорт ауылдарында төрлө ырыу вәкилдәре йәшәй - юрматы, ялан бөрйән, ҡара табын, - тип һөйләп китте ул беҙгә лә. - Мәҫәлән, Ашҡаҙар ярындағы Оло Сытырман ауылы - юрматы ырыуы башы Тәтегәс бейҙең ун биш сатырлы аҡ тирмәһе торған ҡунаҡсыл һәм иркен яҡ була. Оло Сытырманда 1713 йылдарҙа уҡ мәҙрәсә булғаны, уҡымышлы муллалар күсермә китаптар яҙғаны, Аҡтүбә аръяғына ҡаҙаҡ йәйләүҙәренә уҡытыусы-мөғәллимдәр әҙерләгәне билдәле. Был хаҡтағы яҙмалар шәжәрәләргә һәм дини китаптарға асыҡ теркәлгән. Ауылдың ике боронғо зыяратында 1200 йылдарҙағы ҡәбер таштары быға шаһит: яҙыуҙарҙың төҙөклөгө дини ғилемлеләрҙең булыуын раҫлай. Оло Сытырман ауылы мәсете үҙенең мәхәлләһенә ҡараған ун бишләп ауылдың донъяуи мәсьәләләрен дә хәл иткән: халыҡ иҫәбен алыуҙы ойоштороу, мөғәзәйҙәр төҙөп, иген һаҡлау, әрмелә хеҙмәт итергә рекруттар әҙерләү һ.б. Ләкин бәлә килә. Бер заман көслө янғын сыға, ярты ауыл янып көлгә ҡала. Ауылдың бер нисә араһы янған нигеҙҙәрен ҡалдырып, Ашҡаҙар йылғаһы аръяғындағы ырыу биләмәләренә күсенә, шул бер нисә ғаилә Бала Сытырманға нигеҙ һала: Күскилдин, Мәмбәтҡолов, Дәүләтбирҙиндарҙың ата-бабалары улар, ә Сәлишевтар Айтуған ауылына күсенә. Бала Сытырманға, ерҙең аҫаба хужалары булған юрматылар янына башҡа ырыуҙар "үҙ башҡортом" тип килеп һыйына: 18-се быуатта, Батырша һәм Ҡараһаҡал яуҙарын эҙәрләгән карателдәрҙән эҙ яҙҙырып, Ирәндек буйы Ҡушкүл ауылы яғынан ялан бөрйәндәре ер һорап килеп ултыра. Бергәләп Салауат яуын, француз яуын, кантонлыҡ ваҡиғаларын кисерәләр. Егерменсе быуат башында уңдырышлы ҡара тупраҡлы Ашҡаҙар, Күндерәк, Өршәк йылғаһы буйҙарына икенсе милләттәр ҙә күсеп килә: 1900 йылдарҙа Столыпин ер реформаһы һөҙөмтәһендә урта Рәсәй төбәгенән күсерелгән халыҡтар егерме биш ауыл булып, бөгөнгө Федоровка, Стәрлебаш районы ерҙәрен биләй. Урыҫ, мордва халҡы тиҙ арала нығынып, тормошҡа үҙ ҡағиҙәләрен индерә, урындағы боронғо халыҡ бәләкәй ауылдарҙа төпләнеп ҡала...

Шундай артыҡ ҙур булмаған ауылдарҙың береһе Бала Сытырман 1925 йылдарҙа асылған ете йыллыҡ мәктәп менән йәшәй башта, балалары Ҡораласыҡ ауылына урта мәктәпкә йөрөп, татарса уҡырға мәжбүр була. Әммә уңдырышлы баҫыуҙар эйәһе булған Бала Сытырман ауылы 1957 йылда совхоз үҙәге итеп иғлан ителә: ауыл тиҙ арала төҙөкләнә, юлдар нығына, тирә-яҡтағы рус, мордва ауылдары һыпырылып килеп, яңы урамдар асып бында күсенә, һәм мәктәп 1959 йылда урта мәктәпкә әйләнә, йәш быуын башҡорт-рус кластарына бүленеп уҡый башлай. Берҙәм һәм егәрле "Пугачев" совхозы "миллионер" булып китә, әллә нисә фермала, баҫыуҙарҙа хеҙмәт гөрләп тора. Баш агроном Ленир Ибраһим улы Сәлишев алдынғы игенселек нормаларын иҫбатлай, һауа торошона бәйле булған төбәктә ерҙе һөрмәй генә сәсеү, дискорез менән һөрөү - тупраҡты ҡыя ярып ҡына эшкәртеү ысулдарын ҡуллана..."

...Рәйфә Фирғәле ҡыҙы Вәлиева 1977-2010 йылдарҙа Бала Сытырманда йәшәй һәм һигеҙ йыл мәктәптә пионервожатый, завуч-тәрбиәсе, ауыл советында рәйес урынбаҫары булып эшләй. Шунан һуң 17 йыл мәктәп директоры вазифаһын башҡара. Уны һәр саҡ борсоған төп нәмә: ауыр хәлгә тарыған ғаиләләргә ярҙам итеү, шундай ғаиләләрҙә үҫкән балаларҙы аяу, балаларҙың, йәштәрҙең туған телде һанламай, руссаға күсә барыуы. Ошо юҫыҡта ниндәйҙер тәрбиә саралары ойошторорға ла хыяллана. Был теләгенә ирешеү өсөн тормош уның алдына яңы юл аса: райондағы алты ауылдың ҡатын-ҡыҙҙары "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ойоштора һәм Рәйфә Фирғәле ҡыҙын уның етәксеһе итеп һайлай. Был ойошма ағзаларының һәр ғаиләгә, һәр балаға ярҙам ҡулы һуҙыуын, бигерәк тә балаларҙы туған телгә йәлеп итерлек саралар үткәреү мөмкинлеген бигерәк тә күңеленә яҡын ала ул...

Рәйфә Фирғәле ҡыҙы үҙенең ағинәйҙәре-арҡадаштары хаҡында яратып иҫкә ала, уларҙың аҡыллы һүҙҙәрен башҡаларға еткерә. Бала Сытырман ағинәйе Бибинур Кәримованың (1949 йылғы, 2023 йылда мәрхүм булды) һүҙҙәре, мәҫәлән, бөгөнгө башҡорт ҡатынының аҡыл үрнәге, ти ул. Бына ниҙәр һөйләй торған булған Бибинур апай: "Беҙҙең Юрматы ырыуы хаҡында ҡалын, бик ҙур йөкмәткеле китап сыҡты. Туғанҡайҙар, был китап бит беҙҙең хаҡта! Һеҙ ундай яҙмаларҙы уҡып сығығыҙ, күҙегеҙ асылһын. Унда беҙҙең ата-бабаларҙың ауыр заманда ла бирешмәй, бик тырышып йәшәгәне, эшләгәне, ил һаҡлап яуҙарға сапҡаны, илде яңынан тергеҙеп, артабан ғаилә ишәйткәне яҙыла. Уларҙан ғибрәт-өлгө алайыҡ, маңҡорт булмайыҡ. Беҙгә өйөбөҙгә килеп торһон үҙ матбуғатыбыҙ, һөйләп торһон үҙебеҙҙең радио, телевидениебыҙ, клубҡа барһаҡ, уйнап торһон үҙ йәштәребеҙ, мәсеттә вәғәз әйтһен үҙ муллабыҙ... Ҡәҙерен белеп йәшәйек, беҙ бит ағинәйҙәр булырға ниәтләнек, ярты юлда туҡтамайбыҙ инде!" Бибинур Сабир ҡыҙы ауылда бер ғәжәйеп кеше булған: ошо ябай ғына ауыл ҡатыны ауыр хәлдә ҡалған бер туғанын да ҡырға типмәй, ҡайғы эсенә ташламай, үҙенең янына алып баға, ҡарыйҙарын һуңғы юлға оҙата, ғәрип булғандарына аулаҡ урын, ас булғанына йылы аш, яңғыҙына яғым-

лы йөрәк һүҙе табып, өйөндә йәшәтә. Эйе, ошондай ҡатындар - борон-борондан халыҡты йәшәткән рухи энергия-йән ҡушыуы менән көн итеүселәрҙән дә инде...

...Берҙән-бер көндә Өфөлә йәшәгән ҡыҙына һәм улына яҡыныраҡ булыу маҡсаты менән Рәйфә Фирғәле ҡыҙы ғаиләһе менән Шамонин ауылына күсенә. Тормош иптәше, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеменә лайыҡ булған Ғаяз Вәлиев уның төп таянысы. Донъя көткәндә, хужалыҡ мәшәҡәттәрендә генә түгел, ә ағинәйҙәр менән үткәрелгән һәр сарала әүҙем ярҙамсыһы ул уның.

- Шамонин ауылына күсеп килгәс тә бында "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы мотлаҡ кәрәк икәнен аңланым, - тип һөйләй Рәйфә Фирғәле ҡыҙы. - Ни өсөн тигәндә, баш ҡала янындағы мең йортло был башҡорт ауылында бик белемле, зыялы, ҙур тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе булған ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар йәшәй. Улар Башҡортостандың йөрәк тибешен тойоп, уның тормошонда әүҙем ҡатнашып йәшәргә теләй. Шамониндағы эште бала-сағаларҙан башланыҡ, сөнки һәр йортта өсәр-бишәр бала үҫә. Ейәндәрен ҡарашырға килгән өләсәйҙәр бик күп. Бер-беребеҙҙе барлап, һөйләштек тә, беҙҙең ойошмаға килергә теләгәндәр алдына ошондай һорауҙар ҡуйҙыҡ: кеше алдында абруйы, башҡаларға кәңәш-үрнәк бирерлек аңы, холҡо, күрке бармы? Үҙ өлгөһөндә башҡаларҙы тәрбиәләй алырлыҡмы? Үҙенең генә көйөн көйләткән, кеше кәйефен уйламағандарҙан түгелме? Балалар, мәктәп уҡыусылары менән аралашҡанда уларға кәрәкле һәм ҡыҙыҡлы һүҙ әйтә алырлыҡмы? Ҡабат-ҡабат һөйөнсөләйем: беҙҙә бик матур, тәрбиәле, һәләтле башҡорт балалары күп. Уларҙы үҙҙәренең тәбиғи, генетик һаулығын һаҡларға өйрәтеү, сәләмәтлекте нығытыу ысулдарын аңлатыу һәм көндәлек тормошона һеңдереү, шулай уҡ төрлө мәҙәни саралар, йолалар, "Өләсәйем һандығы"ндағы ҡомартҡылар аша уларға туған телдең, тарихи тамырҙарыбыҙҙың ҡиммәтен һеңдереү бик мөһим, ифрат кәрәкле эш, тип иҫәпләйбеҙ...

Рәйфә Фирғәле ҡыҙы өсөн яҙылмаған бер ҡанун донъяуи көскә инә: "Баш ҡалабыҙ Өфө янындағы бөтә ауылдарҙа ла башҡорт ғаиләләре күпләп йәшәй. Улар киләсәктә туған башҡорт телле, тарихи белемле, милли аңлы балаларыбыҙҙы тәрбиәләү өсөн яуаплы. Бөтә мөмкинлектәрҙән файҙаланып, бөтә мәшәҡәттәрҙе ситкә ҡуйып, "Ағинәй" йәмғәт ойошмалары ағзалары урындағы ата-әсәләргә таяныс булып, уларҙың балаларын иң кесе йәштән оло тормош юлына аяҡ баҫҡансы ҡурсырға ярҙам итергә тейеш. Һәр баланы, һәр башҡорт ғаиләһен һәм уларҙың хәл-әхүәлен беҙ белергә тейеш, яҡларға, ярҙам итергә бурыслы... Башҡорт ҡатын-ҡыҙы борон-борондан ғаилә тотҡаһы, ил һәм тел һаҡсыһы, аш-һыу һәм ҡул эше оҫтаһы, хисле һәм тоғро йәнле, ихлас мөхәббәтле зат. Ошо төп сифаттарҙы алға алып, өҫкә ҡалҡытып, беҙ ағинәй булырға ынтылабыҙ. Тимәк, беҙ донъяла яҡшы ғәмәл менән йәшәргә тырышабыҙ. Был һис тә ауыр түгел. Ауыр булғанда ла беҙҙең боронғо тәрбиә, беҙҙең туған тел һәм рухыбыҙ ярҙам итәсәк. Шул минең йәшәү юлым", - ти Рәйфә Фирғәле ҡыҙы.

Яңы Яуыш, Бала Сытырман, Шамонин... Бер тиҫбегә теҙелгән ағинәй доғалары улар. Хоҙай изге теләктәрен ҡабул итһен. Көнөн биргәс, йүнен дә бирһен. Әлмисаҡтан бирле тулҡынған йән энергиялары һәр бәндәнең үҙ юлын тулыһынса именлектә үтеүен талап итә. Ҡыйылған йәндәр, өҙөлгән ғүмерҙәр, ҡалған хәтерҙәр - дейеүҙәй ҡара көс булып иҫәндәрҙең тормошон болғай. Быуын-быуын ошо хаҡта иҫкәртеп, иртәк, ҡобайыр, ҡарһүҙҙәр һөйләгән башҡорт инәй-олатайҙары. Бер кемгә лә донъя тар булмаһын, ағинәй фатихалары, доғалары саф ҡояш нуры булып, бөтөн Башҡортостанды, ҙур илебеҙҙе һәм бөтөн донъяны нурлаһын, тормошобоҙға тыныслыҡ-именлек ҡайтарһын. Шулай тип юрай, доғаларын бағышлай Рәйфә Фирғәле ҡыҙы янындағы ағинәйҙәр.

**Сәрүәр СУРИНА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## БӘҘРӘФКӘ КЕРЕР АЛДЫНАН ҺӘМ ҺУҢЫНАН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒАЛАР

Әнәс бин Мәлик раҙыйаллааһу ғәнһүҙең әйтеүенсә, Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) бәҙрәфкә керер алдынан былай тигән:

**Аллааһүммә иннии әғүүҙү бикә минәл-хубҫи үәл-хабәә'иҫ.** "Эй Аллам! Бысраҡлыҡтан һәм бысраҡ булған бөтә нәмәнән Һиндә яҡлау эҙләйем" (Бохари. "Дәғүәт", 54-се хәҙис).

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) ошо доғаны уҡырға бәҙрәфтән сығыусы кешегә биргән:

**Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии әҙһәбә ғәннии мәә ю'ҙиинии үә әмсәкә ғәләййә мәә йәнфәғунии.** "Миңә зыянлы булған нәмәнән мине ҡотолдороусы һәм миндә миңә файҙалы булған нәмәне ҡалдырыусы Аллаһ Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын" (Ибн Мәджәһ. "Әл-Әзкәр", 28-се аят).

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# КАРТУФЫҢ СЕРЕЙМЕ?



**Картуф ҡаҙыр алдынан йәшелсә үҫкән ерҙе елләтеү һәм бер аҙ киптереү өсөн уның һабағын сабырға кәрәк.**

Былдай ямғырлы йәйҙән һуң картуфты киптереүгә айырыуса ҙур иғтибар бүлеү, уны ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ елләтеү мөһим.

Йәшелсәнең фитофтора менән зарарланыуы, сереүе башта бик үк күренмәҫкә лә мөмкин. Шуға күрә дымлы тупраҡтан таҙартҡанда нығыраҡ баҫып ҡарағыҙ. Һыу сыҡһа, тимәк, серей башлаған.

Йыйылған картуфты яҡшы елләтелгән урында 4-5 көн тотоғоҙ. Ҡышҡылыҡҡа һаҡларға һалыр алдынан ентекле һайлап алығыҙ. Саҡ ҡына серей башлаһа ла йәлләмәй ташлағыҙ, сөнки сир башҡаларға күсергә мөмкин. Һайлап алынған картуфтың өҫтөнә көл һәм аҡбур онтағы һибегеҙ. Йәшелсә һаҡлана торған урынды алдан яҡшылап таҙартығыҙ, дезинфекциялағыҙ, бәшмәк зарарлаған һәм күгәргән урынды аҡлағыҙ. Ағартҡандан һуң бинаны киптерегеҙ.

Мөгәрәптә көкөрт шашкаһын яндырыу яҡшы, ул ауырыу сығанаҡтарын юҡ итә. Баҙға һалынған картуфты һәм йәшелсәне башлыса бәшмәк һәм бактерия кеүек төрлө микроорганизм зарарлай.

Картуфты йәшниккә аҙлап һалһаң, ул яҡшыраҡ һаҡлана. Йыйған ваҡытта ҡабығын зарарламаҫ өсөн уларҙы иплән кенә һалығыҙ, сөнки әрселгән йәки бәрелгән урын тиҙ боҙола.

Ямғырлы йәйҙән һуң уңыш яҡшы һаҡланһын өсөн подвал, баҙ яҡшы елләтелергә тейеш. Ҡышҡылыҡҡа мөгәрәпте мөмкин тиклем оҙағыраҡ япмай тороғоҙ.

Ауырыуҙарын алып ташлау өсөн даими рәүештә картуфығыҙҙы тикшереп тороғоҙ. Яңынан сүпләргә иренмәгеҙ, сереүен ни тиклем алдан асыҡлаһағыҙ, шул тиклем яҡшыраҡ.

Һорауығыҙ булһа, "Россельхозцентр" Федераль дәүләт бюджет учреждениеһы филиалының район бүлектәренә йәки телефон аша мөрәжәғәт итегеҙ: 8 (347)-215-17-03, 8 (347)-260-06-39.

Әйткәндәй, тәжрибәле баҡсасынан бер кәңәш: "Һарайҙың йәки берәй ҡаралтының иҙәненә ҡалын ғына итеп ҡоро бесән түшәгеҙ ҙә өҫтөнә картуфығыҙҙы йәйеп һалығыҙ. Уның өҫтөнә тағы бер ҡатлам бесән һалығыҙ. Ошо килеш тәүге көҙгә һыуыҡтар төшкәнсе ҡалдырығыҙ. Ҡоро бесән картуфтағы барлыҡ артыҡ дымды әкренләп һурып алып бөтәсәк. Былдай картуфты хәүефләнмәйенә баҙға һалырға мөмкин".

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

Көлкөлө булмағыҙ.

Көлкөлө булмау - үҙ-үҙеңде тота белеү генә түгел, ә аҡыл күрһәткесе лә.

Һәр нәмәлә көлкөлө булырға мөмкин, хатта кейенеү ғәҙәтендә лә. Әгәр ир-егет галстукты күлдәгенә, ә күлдәген костюмына ентекләп яраҡлаштырып кейә икән - ул көлкөлө. Ҡиәфәтеңде артыҡ нығ ҡайғыртыу шунда уҡ күҙгә ташлана. Яҡшы кейенеү кәрәк ул, тик ир-егеттәрҙең был тәңгәлдә хәстәре билдәле сиктәрҙән үтмәҫкә тейеш. Төҫ-ҡиәфәте хаҡында артыҡ борсолған ир-егет күңелгә ятмай. Ҡатын-ҡыҙ - икенсе мәсьәлә. Ир-егеттәрҙең кейемендә модаға ишара ғына булырға тейеш. Тап-таҙа күлдәк, таҙа аяҡ кейеме һәм төҫө китмәгән, әммә бик сағыу булмаған галстук - шул да етә. Костюм иҫке булһа ла, бөхтә булырға тейеш.

Башҡалар менән һөйләшкәндә тыңлай белегеҙ, шымып тора белегеҙ, шаярта белегеҙ, әммә һирәк һәм урынлы итеп. Мөмкин тиклем әҙ урын алығыҙ. Шуға төшкө аш мәлендә эргәлә ултырған кешене ҡыҫырыҡлап, терһәктәрегеҙ менән өҫтәлгә таянып ултырмағыҙ, әммә барыһына оҡшарға ла артыҡ тырышмағыҙ. Һәр нәмәлә алтын урталыҡ таба белергә, хатта дуҫлыҡты ла көсләп таҡмаҫҡа кәрәк.

Етешһеҙлектәрегеҙ бар икән, ғазапланмағыҙ. Тотлоғоп һөйләшәһегеҙ икән, был уғата насар, тип уйламағыҙ. Тотлоғоп һөйләшеүселәр һәр һүҙен уйлап әйтә һәм шәп ораторҙар була. Оҫта телле профессорҙары менән дан тотҡан Мәскәү университетының иң яҡшы лекторы тарихсы В.О. Ключевский тотлоғоп һөйләшкән. Аҙ ғына ҡылыйлыҡ - биткә, аҡһаҡлыҡ хәрәкәткә әһәмиәтлелек өҫтәй ала. Әгәр оялсан икәнһегеҙ, бынан да ҡурҡмағыҙ. Оялсан булыуығыҙҙан һис кенә тартынмағыҙ: оялсанлыҡ һөйкөмлө һәм бер ҙә көлкөлө түгел. Ул һеҙ ошо һыҙатығыҙҙан нығ оялып, уны уғата нығ еңергә теләгән осраҡта ғына көлкөгә әйләнә. Ябай булығыҙ һәм үҙ етешһеҙлектәрегеҙгә йомшаҡ ҡарағыҙ. Уларҙан ғазап сикмәгеҙ. Кешелә "кәмселек комплексы" үҫешеүҙән, шул сәбәпле асыу, башҡаларға ҡарата уҫаллыҡ, көнләшеү барлыҡҡа килеүҙән дә насарыраҡ нәмә юҡ. Кеше үҙендә булған иң яҡшы нәмәне - изгелекте юғалта.

Тынлыҡтан, тауҙарҙағы тынлыҡтан, урмандағы тынлыҡтан да яҡшыраҡ музыка юҡ. Тыйнаҡлыҡ һәм шым тора белеү, беренсе урынға үҙеңде ҡуймауҙан да кешелә яҡшыраҡ "музыка" юҡтыр. Кешенең ҡиәфәтендә һәм тәртибендә тәкәбберлек менән ғауғасыллыҡтан да насар һәм ахмағыраҡ нәмә юҡ; ир-егеттең костюмы һәм прическаһына ҡарата артыҡ иғтибары, тапҡыр һүҙҙәр һәм көләмәстәр "фонтаны" һәм һәр хәрәкәтен үлсәп яһауынан да көлкөрәге юҡ, бигерәк тә көләсмәстәр ҡабатланып торһа.

Үҙ-үҙегеҙҙе тотошоғоҙ көлкөлө булыуҙан ҡурҡығыҙ һәм тыйнаҡ, тыныс булырға тырышығыҙ.

Бер ваҡытта ла шашмағыҙ һәм кешеләр менән бер тигеҙ аралашығыҙ, яҡын-тирәгеҙҙе хөрмәт итегеҙ.

Икенсе дәрәжәләге кеүек тойолған, әммә мөһим - тәртибегеҙ, тышҡы ҡиәфәтегеҙ, эске донъяғыҙ тураһында бер нисә кәңәш: физик етешһеҙлектәрегеҙҙән ҡурҡмағыҙ. Үҙегеҙҙе дәрәжәле тотоғоҙ һәм һеҙ ҡупшы булып күренәсәкһегеҙ.

Бер таныш ҡыҙ бар, ул саҡ ҡына бөкрө. Дөрөҫөн әйткәндә, музейҙарҙағы вернисаждарҙа һирәк кенә осрашҡан мәлдәрҙә мин уның зифалығына һоҡланып туя алмайым.

Тағы бер, моғайын, иң мөһим нәмә: ғәҙел булығыҙ. Башҡаларҙы алдарға тырышҡан кеше тәү сиратта үҙе алдана. Ул, миңә ышандылар, тип уйлай, ә ысынында яҡын-тирәләгеләр әҙәп һаҡлап өндәшмәй. Ләкин алдаҡ һәр ваҡыт үҙен һата, алдаҡ һиҙелә һәм һеҙгә ҡарата ерәнеү тойғоһо уяныуҙан тыш, көлкөгә лә ҡалаһығыҙ.

Көлкөлө булмағыҙ! Ғәҙеллек иһә, матур, ниндәйҙер осраҡта алдашыуығыҙ тураһында дөрөҫөн әйтһәгеҙ, ни өсөн шулай итеүегеҙҙе аңлатығыҙ. Бының менән хәлде яҡшыртаһығыҙ. Һеҙҙе ихтирам итәсәктәр һәм һеҙ аҡылығыҙҙы күрһәтәсәкһегеҙ.

Кешеләге ябайлыҡ һәм "тынлыҡ", дөрөҫлөк, кейемгә һәм тәртипкә ҡарата дәғүәләр булмауы - кешеләге иң күркәм "йөкмәткеһенә" әүерелер иң һөйкөмлө "форма".

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 9 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30, 0.15 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера. "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Я не могу без тебя". [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера".
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
15.00, 1.50 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.30 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.30, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.45, 12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.20 Башкортостан. Всё только начинается... [12+]**
**22.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Здесь мои корни. [12+]**
**2.15 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**

## 10 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера. "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Я не могу без тебя". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги".
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Футбол не хоккей". [16+]
2.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ".
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
15.00, 1.50 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.30 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45, 18.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 Уфимские умы. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 21.00 Письма солдатам. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Д/ф "Я Zа Родину самбо". [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Оль-ля-ля!" [12+]**

## 11 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 1.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера. "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Я не могу без тебя". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Хоккей не футбол". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
15.00, 1.50 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.30 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 5.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**18.45 Хоккей. Салават Юлаев (Уфа) - Автомобилист (Екатеринбург). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Не улетайте, журавли!" [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**

## 12 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с Премьера. "Нинель". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Я не могу без тебя". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
2.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
15.00, 1.50 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Дама с собачкой". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.30 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 4.30 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башкорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**

## 13 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Т/с Премьера. "Юг". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Фокусы". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Спроси Суркову". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Футбол не хоккей". [16+]
4.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.35, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
15.00, 2.40 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.00 Х/ф "Бендер: Золото империи". [16+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 18.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Автограф. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**16.45, 19.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15, 22.15, 4.15 Письма солдатам.**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**2.15 Спектакль "Весело живём". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 14 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/с Премьера. "MONEYпуляторы: развод на любовь". [16+]
10.50 Д/ф Премьера. "Я знал, что вы придете..." К 125-летию со дня рождения Вольфа Мессинга. [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Поехали! [12+]
13.20 "Наше всё". [12+]
14.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
15.30 Х/ф "Добро пожаловать, или Посторонним вход воспрещен". [0+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
19.50 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф Премьера. "Командир". [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать".
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
3.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ".
3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя".
4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги".
5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Три лодки судьбы". [16+]
0.30 Х/ф "Самый лучший муж". [12+]
3.55 Х/ф "Любви целительная сила". [16+]
5.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Защитники Отечества. [12+]**
**8.15 Ете егет. [12+]**
**9.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Тирмәкәй. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [6+]**
**11.45 "Крылья танца". Народный ансамбль танца "Guzal Dance". [6+]**
**12.45 Квадратные метры. [12+]**
**13.00 Башҡорттар. [12+]**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.15 Интервью. [12+]**
**16.20 Хоккей. Автомобилист (Екатеринбург) - Салават Юлаев (Уфа). КХЛ.**
**19.30, 5.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Концерт Гульсины Мухамадеевой "Я + я". [12+]**
**3.00 Спектакль "И в шутку, и всерьёз". [12+]**
**4.15 Колесо времени. [12+]**

## 15 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.40 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.20 Т/с "А у нас во дворе. Прерванный сезон". [16+]
15.30 "Горячий лёд". Фигурное катание. Открытие сезона. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
16.55 Д/ф Премьера. "Юлия Чичерина: "И мы будем стоять". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера сезона. "Точь-в-Точь".
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Обоюдное согласие". [18+]
23.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 "Истории Большой Страны". [12+]
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Танго мотылька". [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 19.30, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дорога к храму. [6+]**
**14.30 Честно говоря. [12+]**
**15.15 Письма солдатам. [12+]**
**15.30, 2.45 Башкортостан. Всё только начинается... [12+]**
**16.45 Концерт "Моңдар ҡайтһын ауылға". [12+]**
**19.00 Х/ф "Фото на память". [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Сольный концерт Аскара Абдразакова "История любви". [12+]**
**0.30 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**4.00 Ете егет. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (6) дүшәмбе | 4:41 | 6:39 | 13:30 | 17:40 | 19:45 | 21:44 |
| 10 (7) шишәмбе | 4:43 | 6:41 | 13:30 | 17:38 | 19:42 | 21:41 |
| 11 (8) шаршамбы | 4:46 | 6:43 | 13:30 | 17:36 | 19:40 | 21:38 |
| 12 (9) кесе йома | 4:49 | 6:45 | 13:30 | 17:34 | 19:37 | 21:35 |
| 13 (10) йома | 4:51 | 6:47 | 13:30 | 17:32 | 19:35 | 21:31 |
| 14 (11) шәмбе | 4:54 | 6:49 | 13:30 | 17:30 | 19:32 | 21:28 |
| 15 (12) йәкшәмбе | 4:56 | 6:51 | 13:30 | 17:28 | 19:30 | 21:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Ә бына башҡорттарҙа торна ҡайһы бер ырыуҙарҙың тотем ҡошо. Хатта борон ата-бабаларыбыҙ араһында торнаға табыныу ҙа булған: был турала Ибн Фаҙлан яҙмаларында мәғлүмәт бар.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 СЕНТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТОРНА КӨНӨ



**Был бик үҙенсәлекле байрам 2002 йылда билдәләнә башлаған. Тап ошо осорҙа Америка орнитологтары илдә һәм донъяла торналар һаны ныҡ кәмеүгә борсолоп, икенсе ҡоштарҙың ояларына торна йоморткаларын һалып ҡалдыра башлаған. Һәм нәҡ 8 сентябрҙә иң ҙур бер оя торна бәпкәләре оло тормошҡа әҙерлек үтеп, "имтихандарҙы яҡшы тапшыра" һәм тулы составта йылы яҡтарға осоп китә. Рәсәйҙә лә был ҡоштар күпләп йәшәй, шуға был байрам беҙҙә лә билдәләнә хәҙер.**

Торналарҙың ҡанаттары араһы 200 сантиметрға тиклем етә, улар бик аҡыллы ҡоштар. Шуныһы ҡыҙыҡ, торналарға оҡшаған ҡоштар динозаврҙар осоронда ла Ерҙә йәшәгән икән. Йорт шарттарында торналар 80 йәшкә тиклем йәшәргә мөмкин.

Торна - урыҫ әкиәттәрендә киң таралған персонаж. Көнсығыш әкиәттәрендә был ҡош һөйгәндәрҙе йәки яуҙа ятып ҡалған яугирҙарҙы һынландыра. Ә бына башҡорттарҙа торна ҡайһы бер ырыуҙарҙың тотем ҡошо. Хатта борон ата-бабаларыбыҙ араһында торнаға табыныу ҙа булған: был турала Ибн Фаҙлан яҙмаларында мәғлүмәт бар. Башҡорттарҙа был ҡошто аулау тыйылған. Халыҡ мифологияһында ул ҡанбаба, ҡурсалаусы, изге ҡош булараҡ тасуирлана, туй йолаларында ла торна һәм уның символикаһы ҡулланылған. Торнаға тейеү бәлә килтерә тигән ышаныу ҙа йәшәгән. Ҡош юлы һәм йондоҙҙар торналарҙың ҡауырһындарынан барлыҡҡа килгән, тигән риүәйәт тә йәшәй халыҡ хәтерендә. Әммә шулай изгеләштерелеүгә ҡарамаҫтан, ер йөҙөндә торналарҙың иң ҙур дошманы - кеше. Торналарҙың күп төрҙәре һәр төрлө Ҡыҙыл Китаптарға индерелгән.

Ҡыҙыҡлы фактар: Торналар парҙарына тоғро ҡоштар, бик һирәк кенә алмаштыралар. Донъялағы 15 төр торнаның 7-һе генә Рәсәйҙә оя ҡора. Рәсәйҙә, Голландияла һәм АҠШ-та ғына был ҡоштарҙы үрсетеү үҙәктәре бар. Торналарҙың иң бәләкәй төрө 90 см-ға тиклем, иң ҙуры - 170 см оҙонлоҡта була. Торналар Антарктидала һәм Көньяҡ Америкала ғына йәшәмәй. Тажлы торнанан башҡа бер торна ла ағастарға ҡунмай, сөнки уларҙың эләгеп торорға артҡы бармаҡтары юҡ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**32-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тойғо. Ғәлимов. Багажник. Нисбәт. Шыршы. Ритм. Октава. Әсир. Бра. Ыумас. Торт. Әтәс. Союз. Сәрмән. Ата. Алиби. Ҡарт. Ҡала. Милек. Арба. Даян.

**Вертикаль буйынса:** Щербаков. Бураҡаева. Ыңғырсаҡ. Ғата. Аманат. Жюри. Оялсан. Зат. Әсә. Ижад. Күмәс. Иҙел. Ойоҡ. Ел. Новороссийск. Тараҡ. Бина. Тамаҡтун.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 сентябрь "Алтын асҡыс - remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 12.00 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 сентябрь Премьера! "Мөхәббәт хаҡы"** (В. Афонин). 16+
**13 сентябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**7 сентябрь Премьера! "Сказочный край Башкортостан"** (В. Аношкин). Театр алдындағы амфитеатрҙа яңы ижади миҙгел асылса. 21.00 12+
**13 сентябрь "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 0+
**14 сентябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 15.00 0+
**15 сентябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 сентябрь "Йырла, бейе, студент!"** концерт. 6+
**13 сентябрь "Опера һәм рок"** мультимедиа шоуы. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**10 сентябрь Премьера! "Мой дом"** (Р. Ғәйнуллин), әҙәби-музыкаль композиция. 13.00 12+

## БР Милли музейы

**12 сентябрь "Уйынсыҡ күңеле"** күргәҙмәһе асыла. 0+
**13 сентябрь "Этно стилендә көн"**, музей акцияһы. 11.00 0+
**"Этнос беҙҙә йәшәй"** күргәҙмәһе асыла. 11.00 6+
**14 сентябрь "Александр I Ырымбур губернаһында, 1824 йыл"** автор экскурсияһы. 14.00 12+
**"Ғаилә өсөн күҙәтеү экскурсияһы"**. 15.00 0+
**15 сентябрь "Билбау үреү"** оҫталыҡ дәресе. 14.00 6+

АЛДАЙҘАР!

# МФЦ ИСЕМЕНӘН...

**"Һеҙгә Рәсәй Президенты указы менән түләү тәғәйенләнде. Аҡса алыу өсөн һылтанма буйынса ғариза бирегеҙ".**

Мутлашыусылар Күп функциялы үҙәк хеҙмәткәрҙәре исеменән ошондай хат ебәрә. Был аҡса кешенең һатып алыу мөмкинлеген арттырыу өсөн дәүләт программаһы буйынса тәғәйенләнә, тип яҙа. Хәбәрҙә "заявка"ға һылтанма була - ошо форма аша енәйәтселәр һеҙҙең мәғлүмәттәрҙе урлай.

Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ! Күп функциялы үҙәк хеҙмәткәрҙәре:
- шәхси мәғлүмәттәр йыйыу йәки хеҙмәттәр тәҡдим итеү маҡсатында шылтыратмай;
- телефон аша һәм социаль селтәрҙәге хәбәр рәүешендә иҫәп реквизиттарын һәм банк карталары номерҙарын һорамай;
- һылтанма буйынса сит сайтҡа күсергә тәҡдим иткән СМС-хәбәрҙәр һәм электрон хаттар ебәрмәй.

Башҡортостандың Күп функциялы үҙәгенең рәсми чат-боты ошо һылтанма буйынса, "Телеграм" мессенджерында ғына асыҡ: @mfc02_bot

## МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# "ЯРЛЫҠАУ" ФЕСТИВАЛГӘ БАРА

**Башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең "Ярлыҡау" повесы буйынса ҡуйылған спектаклде "Федерация" Бөтә Рәсәй милли театрҙар фестивалендә күрһәтәсәктәр. Бишенсе тапҡыр ойошторолған фестиваль Чечен Республикаһының баш ҡалаһы Грозныйҙа 8-14 сентябрҙә үткәрелә. Салауат дәүләт башҡорт театры үҙ спектаклен фестиваль ябылған көндә М.Ю. Лермонтов исемендәге Дәүләт рус драма театры сәхнәһендә ҡуя.**



"Ярлыҡау" спектакле сәхнәгә 2023 йылда сығарылды. Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры, инсценировка авторы - Ш. Бабич исемендәге БР Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев был проектҡа үҙ эшенең оҫталарын туплай алған: ҡуйыусы рәссам Сулпан Азаматова, хореограф Ольга Даукаева, композитор Магуля Мезинова һәм яҡтылыҡ буйынса рәссам Илшат Саяхов. Спектаклдә йәш артистар Артур Тажетдинов (Любомир Зух), Нәфисә Мәжитова (Мария Тереза), БР-ҙың халыҡ артистары Яҡуп Шәрипов, Гөлсәсәк Шәрипова, БР-ҙың атҡаҙанған артистары Мираҫ Йомағужин, Рәмзиә һәм Рафаэль Ғәйнуллиндар, артистар Радмир Дәүләтбаев, Юнир Мансуров, Айнур Синагулов, Әмир Үтәбаев, Йәнгүзәл Хәлиҡова, Гөлкәй Хәсәновалар уйнай. "Минең геройыма 20 йәш, ул ғәмһеҙ, балаларса бер ҡатлы. Әлбиттә, Любомир үҙенең йөрәген тыңлай. Тар ҡарашлы кешеләр күҙлегенән ҡарағанда, Зух үҙен аңһыҙ, яуапһыҙ тотҡандыр, дөрөҫ эшләмәгәндер. Ә мин кireһенсә уйлайым. Әгәр ошо ҡылыҡ, ошо ҡасыу, ошо һуңғы хушлашыу булмаһа, нимәне мөхәббәт тип әйтә алабыҙ?" - тип үҙ тәьҫораттары менән бүлешә төп ролде башҡарыусы Артур Тажетдинов.

Салауат дәүләт башҡорт драма театры "Федерация" Бөтә Рәсәй милли театрҙар фестивалендә икенсе тапҡыр ҡатнаша. Был сара РФ Мәҙәниәт министрлығы, РФ Театр эшмәкәрҙәре союзы, Чечен Республикаһы Хөкүмәте тарафынан ойошторола. Фестиваль сиктәрендә 7 көн дауамында Хакасия, Саха Республикаһы (Якутия), Адыгея, Марий Эл, Дағстан, Башҡортостан, Татарстан, Чечен республикаларынан, Ырымбур, Көньяҡ Осетиянан барлығы 13 спектакль күрһәтеләсәк. Шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәре, милли театрҙарҙың режиссерҙары лабораториялары, түңәрәк ҡорҙар, ижади осрашыуҙар, режиссерҙарҙың фекер алышыу майҙансығы ойошторола, профессор Ирина Автушенко етәкселегендә сәхнә телмәре буйынса көн һайын кәңәшмә пункты эшләйәсәк, шулай уҡ милли театрҙарҙың директорҙары өсөн семинар үткәрелә.

Әйткәндәй, "Ярлыҡау" спектакле "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә бойомға ашырылды. Ул "Туғанлыҡ - 2024" Халыҡ-ара фестивалендә "Милли классиканың заманса сиселеше" номинацияһында билдәләнде һәм махсус призға ла лайыҡ булды.

# БАЛАЛАР ТЕАТРЫ ЛА...

**Өфөлә "Ҡолонсаҡ" фестивале үтәсәк, унда төрлө ҡала һәм илдәрҙән ҡатнашыусылар балалар өсөн спектаклдәр күрһәтәсәк.**

Башҡортостанда "Ҡолонсаҡ" балалар театр фестивале тергеҙелә, был турала указға республика Башлығы ошо көндәрҙә ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, халыҡ-ара кимәлдәге сара 2025 йылда ойоштороласаҡ, артабан өс йылға бер үткәреп тороу ниәтләнә. Бының өсөн төбәк бюджетынан аҡса бүленәсәк һәм бюджеттан тыш средстволар йәлеп ителәсәк, тип күҙаллана. Билдәле булыуынса, "Ҡолонсаҡ" фестивале үткән быуаттың 90-сы йылдарында уңышлы барған сараларҙың береһе, уны тергеҙеү тураһында мәҙәниәт эшмәкәрҙәре 2019 йылда уҡ һүҙ ҡуҙғатҡайны.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БҮЛӘК АЛЫРҒА ЯРАТҺАҢ...

**Башҡортостанда 6, 7 һәм 8 сентябрҙә республика етәксеһен һайлау уҙғарыла. Был көндәрҙә "Рәхмәт-2024" акцияһы барышында ҡиммәтле бүләктәр уйнатыла.**

Һайлау участкаларына килгән һәр кем бүләктәр уйнатыуҙа ҡатнашыу өсөн QR-билеттар алырға мөмкин. Ҡатнашыусылар 330-ҙан ашыу ҡиммәтле бүләк отоу мөмкинлегенә эйә. Был исемлектә квадроциклдар, мотоцикл, һыу мотоциклы, велосипедтар, электр самокаттары, шулай уҡ көнкүреш һәм офис техникаһы - телевизорҙар, ноутбуктар, планшеттар, телефондар һәм робот саң һурҙырғыстар бар. Ҡиммәтле бүләктәр 6 сентябрҙә көндөҙгө сәғәт 2-лә һәм киске 8-ҙә, 7 сентябрҙә көндөҙгө 2-лә һәм киске 8-ҙә, 8 сентябрҙә көндөҙгө 2-лә уйнатыла. Йәкшәмбе, 8 сентябрҙә, тәүге тапҡыр "Бүләктәр төнө" ойошторола, унда бер юлы 130-ҙан ашыу бүләк уйнатыла. Һөҙөмтәләр рахмат102.рф сайтында баҫыла. Бүләк алыу хоҡуғын юғалтмаҫ өсөн, QR-билеттарҙы 30 сентябргә тиклем һаҡларға кәрәк. 13 сентябрҙә барлыҡ теркәлгән билеттар Башҡортостан юлдаш телевидениеһының тура эфирында "Ҙур Рәхмәт" суперприздар уйнатыуҙа ҡатнаша. Бүләктәр араһында - машиналар, тотош ғаилә менән Сочиға сәйәхәт, Башҡортостан шифаханаларына һәм ял йорттарына юлламалар. Проекттың төп партнеры - "Өфө ҡалаһының инвестиция-төҙөлөш комитеты"нан Өфөлә өс фатир уйнатыла.

## ТЕЛҺӨЙӘР

# НӘҘБЕРЕК БУЛМА!

**"Матур башҡорт теле". Туған телебеҙҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә арналған бер проект шулай аталғайны. "Туған тел" үҙе үк "ғәзиз, матур, бай, ҡәҙерле" тигән һәм башҡа иң күркәм сифаттарҙы эсенә ала. Уның байлығын үҙебеҙҙең дә телмәргә йоҡтороу яҡлыбыҙ. Ҡалын-ҡалын лөғәттәрҙә тупланған һүҙҙәр араһынан онотола биргәндәрен "йәнләндереү" ҙә шуға ҡеүәт бирер.**

**Нәҙберек. 1.** Нескә, һиҙгер. *Күңелем бик нәҙберек. Музыканттың бармаҡтары нәҙберек була инде.* **2.** Ашһыуға, ризыҡҡа бик айырып ҡараған. *Нәҙберек ҡыҙ. Артыҡ нәҙберек булма.*

**Нәҫ.** Ялҡаулыҡ була "нәҫ". *Нәҫ баҫыу. Нәҫте еңеү.*

**Нәкәҫ. 1.**"Яй, ауыр ҡуҙғалыусан" мәғәнәһендәге һүҙ. *Нәкәҫ ат. Нәкәҫ әҙәм.* **2.** Тағы бер мәғәнәһе - "әшәке, ҡәбәхәт". *Нәкәҫ асылынан ҡасыр (мәҡәл).*

**Оҙаныу.** Нимәгәлер тиклем һуҙылыу, барып етеү була оҙаныу. *Иген баҫыуы урманғаса оҙанған. Һуҡмаҡ йылғаға тиклем оҙана.*

**Өйәр.** Ямғыр йә ҡар һыуынан хасил булған ағым, гөрләүек. *Көслө ямғырҙан һуң, өйәрҙәр гөрләп аҡты.*

**Шулай итеп... Был һүҙҙәрҙе нәҙберек тел хәтере тиҙерәк һеңдерһен.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БУР БАЙЫМАҪ...

## бирән туймаҫ

Һауаға ҡарап өйөң яҡ, әсәһенә ҡарап ҡыҙын баҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетһеҙлек - яҡшы мәктәп, тиҙәр. Бәлки, шулайҙыр. Әммә бәхет тә бит - яҡшы университет.

**(А. Пушкин).**

Ишектән ингән саҡта халыҡтың һине шатланып ҡаршылауында түгел бәхет. Бәхет ишектән сыҡҡан сағыңда халыҡтың һинең китеүеңә үкенес белдереүендә.

**(Балтасар Грасиан).**

"Ҡатын-ҡыҙ нимә теләй, Хоҙай шуны теләй", тиҙәр. Ләкин әйтеп бөтөрмәйҙәр: ҡатын-ҡыҙ нимә теләгәнде бары тик Хоҙай үҙе генә белә...

**(Константин Мелихан).**

Иң ҙур әхлаҡһыҙлыҡ - эшләй белмәгән эшкә тотоноу ул.

**(Наполеон Бонапарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йәш арыҫланды тотоп, бейек ҡойма менән уратып алынған майҙанға ебәрәләр. Ул был майҙанда байтаҡтан бирле йәшәгән башҡа арыҫландар менән танышып ала. Был арыҫландар үҙ фәлсәфәләре, ҡараштары, эшмәкәрлеге, идеологияһы буйынса бер нисә сәйәси, дини төркөмдәргә берләшкән була. Бер төркөмдәге арыҫландар үҙҙәрен ошо майҙанға урынлаштырыусыларға нәфрәттәрен һәм әр һүҙҙәрен еткереү өсөн даими рәүештә бергә йыйыла - әйтерһең дә, нәфрәт белдереүҙән һәм әрләшеүҙән нимәнелер үҙгәртеп була. Икенсе төркөм ағзалары бергә йыйылып, бер ниндәй ҙә ҡойма-маҙар булмаған джунгли тураһында йыр йырлап йыуана. Өсөнсө төркөм ағзалары иһә йыйылып, башҡа төркөм ағзаларына ҡарата көс ҡулланыуҙың йәшерен планын эшләү тураһында фекер алыша. Һәр төркөм яңы килгән йәш арыҫланды үҙенә ылыҡтырырға маташа. Әммә йәш арыҫлан ҡарар ҡабул итеүҙе кисектерә килә. Берҙән-бер көндө бер төркөмгә лә ҡушылмайынса, ситтә яңғыҙы ғына тәрән уйға ҡалып ултырған арыҫлан иғтибарын йәлеп итә уның. Шунан ул яңғыҙ арыҫлан эргәһенә килеп һүҙ ҡуша, ниңә яңғыҙ булыуы тураһында һорау бирергә батырсылыҡ итә. "Был төркөмдәрҙең бер ниндәй әһәмиәте лә юҡ, - ти яңғыҙ арыҫлан. - Был ахмаҡ йәндәр тейеш булғандан башҡа барыһын да эшләй. Ә мин бары тик әһәмиәтле һәм тейеш булғанды ғына башҡарам, һәм бер ваҡыт мин был тотҡонлоҡтан ҡотоласаҡмын..." "Ә нимә һуң ул һин эшләгән тейешле ғәмәл?"- тип һорай унан йәш арыҫлан. "Бына мин әле был ҡойманың төҙөлөшөн өйрәнәм..."- ти арыҫлан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24035

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1525